✓ ***Урамда һәләмә кейемле, өшөүҙән, асығыуҙан дер ҡалтыранған бер баланы күргәс, үҙем дә һиҙмәҫтән: "Йә, Хоҙай, ниңә балалар ошондай яҙмышҡа дусар була? Ниңә бер ни ҙә ҡылмайһың, Раббым?" - тип ысҡындырғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Минең был һүҙҙәремә ҡаршы Хоҙайҙың тауышын ишетәм: "Мин нимәлер ҡылдым - мин һине ярлттым..."***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№37 (611)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һайлауҙарға барам әле...



3

Буласаҡ юристарға...



Мәскәү ҡунағының һабаҡтары

5

Аҡсаның есе юҡ...



әммә тәме бар

8-9

Хаҡ тамырҙарың...



үҙ асылыңа ҡайтара барыбер

13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Республика башлығы менән осрашып һөйләшергә тура килһә, уға ниндәй теләктәрегеҙҙе еткерер инегеҙ?

***Мансур ҺИҘИӘТОВ, Белорет ҡалаһынан штаттан тыш хәбәрсебеҙ, металлург:*** Халыҡ тауышы менән һайланған республика башлығы иң тәүҙә үҙенең ниндәй төбәккә етәкселек итергә килеүен, уның бөтөн үҙенсәлектәрен, унда төйәкләнгән халыҡтарҙың тормош кимәлен һәм ниндәй кәйеф, уй-ниәттәр менән йәшәүен яҡшы аңларға, күреп-белергә тейештер, тип уйлайым. Шуға ла уға еткерергә теләгән теләктәремдең иң тәүгеһе - ил башлығы, үҙе ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙең ошо республиканың барлыҡҡа килеүенә нигеҙ һәм сәбәпсе булған, уға үҙ исемен биргән, ошо илдең азатлығы һәм бөгөнгөһө хаҡына аҫылдарҙан-аҫыл ғәзиз уландарын ҡорбан иткән аҫаба халыҡ - ғүмер-ғүмергә ошо ерҙә төйәкләнгән башҡорттар мәнфәғәтен дә ихтирам итһен, уның артабанғы үҫеш юлы, яҙмышы өсөн яуаплылыҡ тойһон ине. Юҡ, был һис кенә лә халҡыма айырым ҡараш талап итеү түгел, ә йылдар буйы күҙәтелә килгән битарафлыҡ, урыны менән уның мәнфәғәттәрен һанламау, проблемаларын күрмәмеш булыу, ә инде айырым ҡайһы берәүҙәр тарафынан милләтемә ҡағылышлы бөтөн нәмәгә асыҡтан-асыҡ кәмһетеүле, мыҫҡыллы мөнәсәбәттән тыуған әрнеүле уйҙарым ғына ни бары. Һәр хәлдә, ҡеүәтле ҡәүемдәрҙең береһе булараҡ, быуаттар ғына ла түгел, ә меңъйыллыҡтар аша, күп юғалтыуҙарға дусар итеп, бөгөнгө көнгәсә килеп етергә көс тапҡан боронғо халыҡтың тарихи хәтеренә, ҡаһарманлығына ихтирам менән ҡарарға тейештер, тием, ил башлығы буласаҡ кеше. Сөнки күп нәмә тап уның ҡараштарына бәйле: ул, әйтәйек, ниндәйҙер мәсьәләлә принципһыҙлыҡ күрһәтә икән, башҡалар, уға ярарға тырышып, ошо өлкәлә лаф орорға, эште ҡуйыртырға, ҡабартырға әҙер генә тора, сөнки теге йә был мәсьәләлә етәксенең битарафлыҡ күрһәтеүен өнһөҙ ризалыҡ тип тә аңларға була бит. Бөтә был әйткәндәрем республикала халҡыбыҙҙың туған телен, мәҙәниәтен, тарихын һаҡлау, үҫтереү һәм өйрәнеү мәсьәләләренә бер тигәндәй ҡағыла. Халыҡтың телен ҡурсаламай тороп, уның мәҙәниәтен үҫтереү ҙә, һаҡлау ҙа мөмкин түгел, ә мәҙәниәтһеҙ халыҡ булмай. Аллаға шөкөр, беҙҙең быуаттар төпкөлөнән килгән йолаларыбыҙ, башҡа халыҡтарҙа булмаған героик эпостарыбыҙ, риүәйәттәребеҙ, бүтән төр ауыҙ-тел ижады хазиналары бар. Әсә телебеҙҙе һаҡлай алмаһаҡ, ул һүҙҙә түгел, ә асылда дәүләт яҡлауынан мәхрүм ителһә, халыҡты халыҡ иткән әлеге хазиналарыбыҙ ҙа юҡҡа сығасаҡ бит. Йә булмаһа, уны башҡалар үҙләштерергә әҙер генә тороуын да күрмәй булмай.

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында белем биреү системаһында өлгәшелгән уңыштар һуңғы йылдарҙа һиҙелерлек юғалтыуҙар кисерә. Был бигерәк тә туған телдәрҙе уҡытыуҙа асыҡ күренә. Балалар һаны кәмей, оптималләштереү тигән һылтау менән йөҙәрләгән ауыл мәктәптәрен ябыуҙың нилектәндер күбеһенсә башҡорт мәктәптәренә ҡағылыуы аңлашылып бөтмәй. Башҡорт теле дәүләт теле булғас, закон нигеҙендә дәүләт тарафынан яҡланырға, һаҡланырға тейешлеген иҫкә төшөрөп тороу ҙа артыҡ һымаҡ. Дәүләт телдәрен өйрәнеүҙең төп нигеҙе булған башҡорт мәктәптәре ябыла икән, был мәсьәләне БР Конституцияһының төп гаранты булған республика башлығы мотлаҡ үҙ ҡурсыуына алып, башҡорт теленең Конституция менән нығытылған хоҡуғын бойомға ашырырға тейеш. Конституция тигәндән, һайлауҙарға әҙерлек барышында уҡ беҙ уның боҙолоуына шаһитбыҙ. Белеүебеҙсә, республика президенты (башлығы), ниндәй милләт вәкиле булыуына ҡарамаҫтан, ике дәүләт телен дә яҡшы белергә бурыслы, ә башлыҡ вазифаһына дәғүә итеүсе кандидаттар араһында, күреүебеҙсә, Төп законыбыҙ талаптарын һанға һуҡмаусыларҙың да булыуы, дөрөҫөн генә әйткәндә, башҡа һыйғыһыҙ. Әгәр ана шундайҙар һайлана ҡалһа, айырым халыҡ ҡына түгел, ә тотош республикабыҙ менән ни буласағын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел...

Әйтергә иткән тағы бер теләгем - ил башлығы закондарҙы боҙоуға юл ҡуймаһын ине.

Сәнәғәткә ҡағылышлы теләктәрем дә бар. Декларатив пландарҙан ҡотолоу кәрәк. "Белсталь" заводы, Белорет-Учалы, Өфө-Нефтекама тимер юлдары, Стәрлетамаҡ-Магнитогорск, Стәрлетамаҡ-Межгорье һәм башҡа йүнәлештәрҙә автомобиль юлдары төҙөлөүен халыҡ күптән көтә.

Тағы бер мәсьәлә: йыл һайын республика бер нисә йөҙ миллиард һумлыҡ инвестиция ала. Хәҙер уның суммаһы триллион һумдарға етеп баралыр инде. Тиҫтәләрсә йылдарға алдан бурысҡа батырыу түгелме был республиканы?..

(Дауамы 2-се биттә).

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ҘУР ЕҢЕҮҘӘР...

## үҙеңде еңеүҙән башлана



**Башҡорт егеттәре араһында милли көрәш иң популяр спорт төрҙәренең береһелер ул. Ҡыйғы районы Арыҫлан ауылы егете Артур ЗӨЛҠӘРНӘЙЕВ та уны ғүмерлек шөғөлө итеп һайлаған. Ун биш йәшендә генә - Рәсәй, ун ете йәшендә көрәштең өс төрө буйынса донъя чемпионы титулын яулаған Артур бөгөн Башҡорт дәүләт университетының Физика-технологик институтында геофизика йүнәлешендә белем ала. Милли спорт төрөн үҫтереү менән бер рәттән, сит ерҙәрҙә башҡорт халҡын, башҡорт илен данлап йөрөгән батыр егет менән әңгәмәбеҙ ҙә көрәш, уға илткән юлдар, ваҡиғалар хаҡында, тырышлыҡ аша еңелеүҙәрҙең еңеүҙәргә әйләнеү мөғжизәһенә эйә булыуы тураһында барыр.**

(Дауамы 6-сы биттә).

*✓ Мин, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, уға шундай теләгемде еткерер инем: республикабыҙҙа милләт-ара татыулыҡты нығытыу буйынса нығышмалыраҡ эшләргә! Берүк Украиналағы һымаҡ хәлдәрҙе күрергә яҙмаһын.*



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Республика башлығы менән осрашып һөйләшергә тура килһә, уға ниндәй теләктәрегеҙҙе еткерер инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлфирә ӘХМӘТШИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Благовар районы Иҫке Күсәрбай ауылы:*** Республика башлығы менән осрашыу форсаты тейһә, мин, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән балаларға белем биреүсе ябай ғына ауыл уҡытыусыһы, уға шундай теләгемде еткерер инем: республикабыҙҙа милләт-ара татыулыҡты нығытыу буйынса нығышмалыраҡ эшләргә! Берүк Украиналағы һымаҡ хәлдәрҙе күрергә яҙмаһын. Милләт-ара һыйышып тыныс йәшәү рәүеше, бер-береңә ихтирам тойғоһо, минеңсә, мәктәп йылдарында һалына, сөнки төрлө милләт балалары бер класта, бер парта артында ултырып белем ала, бер-береһенең телен, холҡон, мәҙәниәтен өйрәнә. Шул уҡ ваҡытта уларҙа үҙҙәре йәшәгән төбәк халҡының телен, тарихын өйрәнеү ихтыяжы ла тыуа. Беҙҙең мәктәптә генә лә тиҫтәгә яҡын милләт балалары белем ала: башҡорт, татар, үзбәк, тажик һ.б. Июнь айында баш ҡалабыҙ Өфөлә үткәрелгән "Һаумы, һаумы, әкиәт!" республика конкурсында минең уҡыусым - татар малайы саф башҡорт телендә һинд халыҡ әкиәтен һөйләп ишеттереп, Гран-при яуланы. Күпме тел, күпме мәҙәниәт беләһең - шунса һин байыраҡ һәм шунса мәҙәнилерәк, тип өйрәтәм уларҙы. Балалар бер-береһе менән итәғәтле, матур мөғәмәлә итә, милләт айырыу кеүек алама ғәҙәт юҡ беҙҙә, шөкөр. Шуға ла тағы бер ҡат ҡабатлағым килә: республикабыҙҙа милләт-ара ыҙғышҡа юл ҡуймаҫҡа, бер милләтте икенсеһенә ҡаршы ҡуйыу, кәмһетеү факттарының һәр береһе кисекмәҫтән тикшерелеп, ғәйеплеләр тейешле яҙаһын алырға тейеш. Юғиһә, өндәшмәй ҡалыу - ана шундай хоҡуҡ боҙоуҙар фактын хуплау тигәнде аңлатасаҡ.

***Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА, журналист, шағирә:*** Республикабыҙ кимәлендәге етәкселеккә, улар менән осрашырға тура килгән хәлдә лә, ниндәйҙер теләктәр еткереүҙең мәғәнәһен, файҙаһын күрмәйем, сөнки ябай халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалыу тигәнде әлегә ишеткән-күргән юҡ. Беҙҙә бит бөтөн сәйәсәт юғарынан төшкән күрһәтмә, бойороҡ буйынса алып барыла. Ябай бер кешенең фекере - власть өсөн нуль, сөнки нимәнелер халыҡ һорауы буйынса хәл итергә, нимәнелер үҙгәртергә Үҙәктән ҡурҡа беҙҙә етәкселәр. Шуға ла әлеге һорауығыҙға аныҡ тәҡдим, теләктәр әйтеп тороуҙы кәрәк тапмайым, сөнки ғүмер буйы һүҙ менән эшләп, ижад итеп, уның ҡәҙерен, тылсымын белгәнгә күрә лә уны "ҡыуан ел"гә осорғом килмәй. Илем, халҡым һәм ейгән икмәгебеҙ кеүек ғәзиз минә һүҙем.

Үҙәк менән төбәк араһында ер менән күк айырмаһы артабан да йәшәп килеүен дауам итһә, Башҡортостаныбыҙ совет заманынан бирле килгән "һауын һыйыры" роленән сыға алмаһа, урындағы мәнфәғәттәр бер тин ише лә һанға һуғылмаһа, республика халҡының тормош хәле һаман түбән тәгәрәйәсәк. Ҡыҙыҡһынған кешегә яҡшы мәғлүм: Мәскәүҙә, рәсми мәғлүмәттәр буйынса, былтыр уртаса эш хаҡы 57 мең булһа, быйыл тағы ла арта төшкән - 60 мең! Был дөйөм Рәсәй буйынса күрһәткестән 85 процентҡа юғарыраҡ. Башҡортостанда, мәҫәлән, уртаса эш хаҡы ни бары 20 мең самаһы ғына. Мин үҙем, мәҫәлән, 40 йыл стажым була тороп, айына ни бары 8 мең эш хаҡы алам. Мәскәүҙә иҙән йыуыусы башҡорт журналисына ҡарағанда 4-5 тапҡырға күберәк эш хаҡы ала (уның уртаса эш хаҡы 35 мең булһа, урам һепереүсенеке - 36 мең). Үҙәк ғүмер буйы шулай төбәк иҫәбенә балда-майҙа йөҙөп йәшәй. Халыҡ байлығы иҫәбенә байыған олигархтар, бәйләнсек себендәй маҙаға тейеүсе бер үк кешеләр - шоу-бизнес монополияһы әһелдәренең типтереп йәшәүе чума мәлендә ҡоторонған туй күренешен хәтерләтеп ҡуя...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛҒА ЙӨҘ МЕНӘН БОРОЛАЙЫҠ!

**Гөлнур ИШБУЛАТОВА, Баймаҡ телерадиотапшырыуҙар студияһы директоры:** Хеҙмәт юлымды район ерлегендә башлап ебәрҙем: юғары уҡыу йортон тамамлағас та, эшкә үҙебеҙҙең төбәккә (Сибай ҡалаһына) ҡайттым. Сибайҙа биш йыл эшләп, байтаҡ тәжрибә туплағас, Өфө ҡалаһына юлландым. Хәтһеҙ генә ваҡыт (15 йыл самаһы) эшләгәндән һуң районға кире ҡайтырға тура килде. Күрәһең, мин бер урында ултырып эшләй торған кеше түгел. Ижад офоҡтары тарая башлаған һымаҡ булды ла, мин ергә, ауылға, кешеләргә яҡынораҡ булырға теләнем. Өфөлә ултырып, кешеләрҙең аһ-зарын телефондан ғына тыңлау - бер, ә ауыл ерендә халыҡ менән бер тында йәшәү, ижад, хеҙмәт менән шөғөлләнеү - бөтөнләй икенсе нәмә икән. Шуға ла башкөлләй ауыл тормошона сумдым, уларҙы "Юлдаш" радиоһына сығарам, районда телевидениенан күрһәтәм. Рәхәт, геройҙарым янымда йөрөй. Тапшырыуҙарымды бер ҡалыпҡа ғына һалып, бер төрлө итеүҙән мөмкин тиклем алыҫыраҡ торорға тырышам. Минең өсөн иң мөһиме - тос фекерҙәр, халыҡсанлыҡ менән һуғарылған сығыштар, беҙҙең төбәк халҡы тормошонда осраған иң үҙәккә үтерлек проблемалар тураһында бәйән итеү. Әйтәйек, ауыл йәштәренең эш эҙләп, Себер тарафтарынан "һемәйеп" ҡайтыуын ишетһәм, уларҙы эҙләп табам. Бынан тыш, теге йәки был ауылда ниндәй хеҙмәткәрҙәр талап ителә, шул турала ла халыҡҡа даими хәбәр итәм. Ҡайһы ауылда тормош яҡшы ғына бара - шунда йәштәр ҙә ситкә китмәй, һөҙөмтә булараҡ, беренсе синыфҡа барыусы балалар һаны ла бер кимәлдә һаҡлана. Әммә күпселек ауылдарҙың хәле мөшкөл. Дәүләт ауылды заман даръяһында яңғыҙы йөҙгән карап хәлендә ҡалдырҙы. Хужалыҡтарға, ғөмүмән, тармаҡҡа тейешле белгестәр әҙерләү алғы планға сығырға тейеш. Төбәк кешеһен ер эшенән айырғанбыҙ, яуаплы булырға өйрәтмәгәнбеҙ, кешенең үҙенән инициатива аҙ һәм был, минеңсә, иң ҙур проблемаларҙың береһе. Ерҙә ҡалып эшләрлек төплө хеҙмәт урындары булдырыу - заман талабы.

Быларҙы нимәгә теҙеп-теҙеп әйтә, тиһегеҙме? Бөтөн кешегә лә ҡалала йәшәргә тимәгән. Кем дә кем ҡаланан ауылға ҡайтыуҙы мөмкин түгел эш тип һанай, шундайҙарға һабаҡ булһын, тим. Бер танышым: "Ҡалала арҡаһын нығытҡан белгестәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең күбеһе ауыл еренә ҡайтып йәшәй, эшләй башлаһа, ауылдарҙың үҫешенә булышлыҡ итер ине", - тигәйне. Мин дә был фекер менән килешәм. Һуңғы ваҡытта ҡала ерендә йәшәүсе күп кенә зыялыларыбыҙ йәштәрҙе ауылға ҡайтарыу, ҡалдырыу зарурлығын телгә ала. Был, әлбиттә, һәйбәт күренеш. Әммә, нисек кенә булмаһын, ул һүҙҙәр эш булараҡ та тормошҡа ашырылырға тейеш. Зыялылар йәштәргә үҙҙәре юл күрһәтһен ине. Һүҙемде йомғаҡлап, замандаштарға әйтә торған һүҙем шул - ауылға йөҙ менән боролайыҡ. Дәүләттән генә көтөп ятмайыҡ. Ауыл бөгөн хәл иткес ҡарарҙар алдында тора. Уның киләсәге беҙҙең ҡулдарҙа.

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле башланды. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн сентябрҙән **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән 50673 индекслыһының хаҡы - 543 һум 72 тин.

● Сентябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.



**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **252 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **252 һум**.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓11 сентябрҙә Тажикстандың баш ҡалаһында Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының ике көнлөк саммиты асылды. Унда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары - Рәсәй, Ҡытай, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан һәм Үзбәкстан дәүләттәре башлыҡтары, шулай уҡ ҡайһы бер күҙәтеүсе-дәүләттәр һәм уҙаҡташ-илдәр башлыҡтары ҡатнашты. Саммит һуңында, 12 сентябрҙә, ойоштороуҙа рәйеслекте Рәсәй ҡабул итте, ә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының киләһе саммиты 2015 йылдың июлендә Өфөлә үтәсәк.

✓Дүшәмбелә (Тажикстан Республикаһы) Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың Тажикстан Республикаһы Премьер-министры Кохир Расулзада менән осрашыуы уҙҙы. Кохир Расулзада Өфөлә үтәсәк Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының киләһе саммитын республиканың юғары кимәлдә уҙғарыуына ышаныс белдерҙе, Өфөләге Тажикстандың генераль консуллығына күрһәтелгән булышлығы өсөн Башҡортостан етәксеһенә рәхмәт әйтте. Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, Тажикстан һәм Башҡортостан бизнесы араһында әйләнеш 65 миллион доллар тәшкил итә. Бындай эшмәкәрлекте арттырыу мөмкинлектәрен ҡарарға кәрәк. Рөстәм Хәмитов шулай уҡ Дүшәмбелә (Тажикстан Республикаһы) Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы Эшлекле советы идараһы ултырышында сығыш яһаны.

✓Билдәле яҙыусы һәм драматург Азат Абдуллин юғары профессиональ оҫталығы һәм күп йылдар буйына намыҫлы хеҙмәте өсөн "Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Тейешле Указға республика башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы тураһындағы положениеға үҙгәрештәр индерҙе. Документҡа ярашлы, журналистика өлкәһендә иң яҡшы әҫәр ижад иткән һәм премияға лайыҡ булған ижадсыға 100 мең һум күләмендә аҡсалата бүләк биреләсәк. Шундай уҡ сумманы иң яҡшы әҫәр ижад итеүсе коллектив та аласаҡ. Премияға лайыҡ булған коллективтың һәр авторына премия лауреаты исеме бирелә. Элек премия тураһындағы аҡсалата бүләктең суммаһы 50 мең һум тәшкил итә ине.

КӨНАУАЗ

**Яңғыраған, яҙылған, әйтелгәндәрҙең аныҡ тәғәйенләнешенә ҡайһы саҡ иғтибар биреп еткермәйбеҙ. Ә бит ғәмәлдә ҡыҫҡа ғына һүҙ артында тәрән мәғәнәле кинәйә ята. Мәҫәлән "Һайлау" һүҙе нимәнелер үҙ итеүгә, яҡын итеүгә, һайлауға ҡоролған - барыр юлды, тарафты, яҙмышты, башҡарыр шөғөлдө, йәненә оҡшаған әйберҙе һайлау… Ғөмүмән алғанда, бөгөн ул һүҙ парламентҡа, урындағы үҙидараға депутаттар, президент һайлауҙарына бәйләп ҡулланыла. Тимәк, уның мәғәнәһе лә киң, сәйәси төшөнсәһе лә тос. Бына тағы беҙҙең өсөн, йәмғиәтебеҙ өсөн үтә лә яуаплы мәл, һайлауҙар осоро килеп етте. Бөгөнгө бер кәлимә әйтерем ана шулар хаҡында. Алдан уҡ иҫкәртеп китәм, яҙғандарым һүҙ булмағанда һүҙ булһын, тип ҡоро әңгәмә сыбалтыу түгел, уйымдағын, күңелемдәген һеҙгә еткерәм, хөрмәтле уҡыусым.**

# ҺАЙЛАУҘАРҒА БАРАМ ӘЛЕ...



Һайлау, тиһәм, уйым менән йыш ҡына үткәндәргә, йәшлек йылдарына әйләнеп ҡайтам. Йәшерен-батырын түгел, ошо ҡояшлы, ҡотло, нурлы көн аңыма көйөк, үпкә булып та уйылған. Хәтеремдә, медицина училищеһында уҡып йөрөгән саҡ. Йәмле йәй башында, һайлау көнөндә, ауылға ҡайттым. Шулай булмай тағы, был көн һәр ерҙә оло байрам итеп ҡабул ителә ине ул замандарҙа; бәғзеләр ер аяғы ер башынан ҡунаҡ саҡыра, икенселәре юбилейын, йә туй мәшәҡәттәрен билдәләй, ҡайһы берәүҙәр юҡ тигәндә күршеләрен сәйгә йәүкәләй, тантана тәғәйенләмәгәндәр ҙә башҡаларҙан ҡалмаҫҡа тырышып, ҡапҡа ауыҙына ҡыҙыл флагын йә сәскәле яулығын сығарып элә, күнәгенә ҡапҡаһы тап килһен, йәнәһе. Күрше ауылдар һыныҡҡа һылтау, тигәндәй, аттар егеп, ҡуна килә. Клуб ҡыйығына ҡуйылған радионан иртә таңдан күңелле көйҙәр ағыла башлай, һайлау үтәһе ерҙә йәштәр концерт ҡуя, халыҡ уйындарын ойоштора. Байрам инде, ысын байрам,мөғжизә, һабантуйҙан бер ҙә кәм түгел!

Беҙ ҙә байрамса кейенеп алып, урам буйлап атлайбыҙ. Әсәйем ҡаршыға осраған берәүгә ҡыуаныслы хәбәрен еткерә: "Бына улым ҡалала уҡып йөрөгән еренән һайлауға тип ҡайтып төштө әле, уға быйыл бит 18 йәш тулды. Уҙған ғүмер, кисә генә бала ине..." Һайлау участкаһында беҙҙе күңелһеҙ яңылыҡ көткән икән, түрҙә урынлашҡан комиссия мине ҡәтғи рәүештә өҫтәмә һайлау исемлегенә керетергә теләмәне, сөнки ситтә уҡып йөрөйөм, ә үҙем тәжрибәһеҙлегем арҡаһында тегенән кәрәкле документ алып ҡайтмағанмын. Комиссия составында уҡытҡан уҡытыусыларым, ауылдаштарым була тороп, һайлатмай баш тартһындар инде, үпкәләмәҫ ерҙән үпкәләрһең! Шулай итеп, тәүге тапҡыр тауыш бирергә теләүем уңышһыҙ тамамланды. Башҡалар алдында кәмһенеп, түбәнһенеп сыҡтым, хаҡлы хоҡуғынан яҙған кешеләй хис иттем үҙемде. Хәҙер һайлауҙарға барһам, мине онотоп, исемлектән төшөрөп ҡалдырманылармы икән, тип шөбһәләнәм. Был үтә лә мөһим сәйәси сарала ҡатнашмау, үҙ тауышыңды башҡаларҙыҡына ҡушмау, өнһөҙ ҡалыу, хатта ки фанилыҡта юғалып, йәмғиәттә онотолған әҙәм сүрәтендә ҡалыуға бәрәбәр.

Беҙҙең халыҡ борон-борондан һәр шөғөлдө бергәләп башҡарған, күмәкләшеп сәскән-урған, эркелеп килеп күршеләренә ярҙамлашҡан, дәррәү ҡуҙғалып, өй күтәргән. Бергәләп, иңгә-иң терәп эшләү, һәр нәмәне өмәләп башҡарыу беҙҙең халыҡтың ҡанында, уның булмышында. Атабабаларыбыҙҙың "Айырылғанды - айыу, бүленгәнде бүре ашар", "Ил төкөрһә - күл булыр" тигән урынлы мәҡәлдәре лә ерле юҡтан килеп сыҡмағандыр, моғайын. Шул бер төптән булыу, бер теләктә йөрөү әлеге беҙҙең алда торған һайлауҙарға ҡағылмаймы ни, йәмәғәт? Һис шикһеҙ, ҡағыла! Бөгөнгө йәштәрҙең: "Һайлауға барып ваҡыт үткәреп йөрөмәйем, унда ни ҡалған миңә?" тигән һүҙҙәрен ишетәһең дә аптырап ҡалаһың ҡайһы саҡ. Уларҙы бер кем дә тау-таш аҡтарырға, йә булмаһа, көстәренән килмәҫлек эш эшләргә өгөтләмәй ҙә баһа, бары гражданлыҡ бурысын атҡарырға ғына өндәй. Бөгөн иң ҡурҡынысы, әле йәшәп килгән һәм тарала барған: "Кеше ҡайғыһы төштән һуң" психологияһы, рус телендә лә ул тапҡыр яңғырай: "Моя хата с краю". Битарафлыҡ, һәр нәмәгә ҡул һелтәп ҡарау бөлдөрә бөгөнгө йәмғиәтте.

Әүәлге һайлауҙар ихласыраҡ үтә ине, минеңсә, был хаҡта юғарыла әйттем бит инде. Депутатлыҡҡа кандидаттар ҙа алдан билдәләнә, уларҙың халыҡ вәкиле булып үтәсәктәренә тамсы ла шик юҡ, мәгәр һайлаусылар һайлауҙарға теләп бара һәм, әйтергә кәрәк, үҙенең гражданлыҡ бурысын аҙағынаса, еренә еткереп башҡара ине. Кандидаттар менән осрашыуҙар ойошторолманы, тип тә үпкәләмәй халыҡ, сөнки ул юғары посҡа абруйлы кешеләр, арҙаҡлы шәхестәр тәғәйенләнә ине, ә улар менән осрашыу, аралашыу - тормошҡа ашмаҫ хыял. Беҙҙең ауыл Советы бер нисә саҡырылыш СССР-ҙың юғары Советына финанс министры Василий Федорович Гарбузовты, шунан өс тапҡыр Социалистик Хеҙмәт Геройы, бар донъяға билдәле авиаконструктор Андрей Николевич Туполевте һайланы. Ундайҙар төпкөл ауылға осрашыуға тип килеп йөрөйҙәрме инде тағы, осраҡлы ғына район үҙәгенә һуғылһалар ҙа беҙҙең өсөн баштан ашҡан бәхет булыр ине әле! Уның ҡарауы, мәктәптә лә, клубта ла, ҡыҙыл мөйөштә лә улар тураһында тулы мәғлүмәт туплана, ауыл буйлап теҙелгән һәр бағанаға уларҙың автобиографияһы яҙылған төҫлө һүрәттәр йәбештерелгән була, уҡымаҫ ерҙән уҡырһың, белмәҫ ерҙән белерһең.

Шул осорҙа һайлауға агитация кампанияһы башланғас, райондан вәкил килеп төшкән дә һайлау эштәренең барышы менән танышып йөрөй икән. Урамда һикһәнен тултырып туҡһан яғына аяҡ баҫҡан Мәхәмәтғәле ҡартты тап иткәндәр. "Олатай, кемде һайлайбыҙ әле депутат итеп?" тип, аҡһаҡалдың зиһенен тикшерә икән түрә. "Район һынлы район үҙәгендә йәшәп, юғары вазифа биләп, шул ҡәҙәре лә оңҡотһоңмо ни, улым? - тип ҡыҙҙырып ташлаған вәкилде олатай. - Кемде булһын, Ҡарбуҙовты һайлайым!" "Ә ни өсөн уны?" "Ни тиһәң дә, илдең аҡса хужаһы бит ул. Һайлап ебәрһәк, бәлки, Һаҡмар аша баҫма һалдырыуға аҡса бүлер. Юғиһә, яҙғы ташҡын мәлендә беҙҙең халыҡ урауҙан йөрөп этләнә бит. Һис һүҙһеҙ Ҡарбуҙовты һайлайым, халыҡ өсөн атҡарған яуаплы эштәре лә ҡарбуҙҙай түңәрәк һәм татлы булһын!"

Ул осорҙа агитация эштәре лә юғары кимәлдә ҡуйылғайны шул. Агитаторҙар өй беренсә бер нисә тапҡыр йөрөп сыға, кандидаттарҙың биографияһы менән таныштыра, уларҙың һайлау алды платформаһын уҡып ишеттерә. Ә инде һайлау көнө килеп етһә, өлкәндәр беренсе булып тауыш биреп, үҙенең изге һүҙен әйтеп, бүләк алырға тырыша, йәнә ундай кешенең фотоһы район гәзитенең беренсе битендә баҫылып сыға, ә был тотош районда билдәлелек яулау тигән һүҙ. Бөгөн телевизор көнө-төнө эшләп торғанда, интернет селтәре донъяны солғап алған дәүерҙә быңдай сараларҙың кәрәге лә юҡтыр. Ойошторолһа ла, ундай сараларҙа халыҡ барыбер ҡатнаша һалып бармай бит инде ул. Сөнки, йәшерен-батырын түгел, хәҙер күптәр тормошҡа, көнитмешкә вайымһыҙыраҡ ҡарай, үҙ донъяһына бикләнеп, йәмәғәт эштәренә ҡул һелтәп йәшәй. Ҡайһы берәүҙәр, власть халыҡтан ныҡ алыҫлашты, тип аҡыл һатырға әүәҫләнеп алды. Ошондай тәнҡит менән булып, баш ауырттырғансы, һәр кем үҙенең ҡулынан килерҙәй эште эшләһә, илебеҙ үҫешенә үҙ өлөшөн индерһә, тормошобоҙ ҙа алға барыр, көнитмешебеҙ ҙә күпкә яҡшырыр.

Республикабыҙҙың көсө, ҡеүәте, уның киләсәккә өмөтө - берҙәмлектә, ана шуны бер ваҡытта ла онотмаһаҡ ине. Бер төптән булыу, бер теләктә йөрөү әлеге беҙҙең алда торған һайлауҙарға ла ҡағыла. Ошо матур сифаттарыбыҙҙы һайлауҙарға дәррәү барып та раҫлайыҡ әле, йәмәғәт. Был үтә лә мөһим сәйәси сарала ҡатнашмау, үҙ тауышыңды башҡаларҙыҡына ҡушмау, өнһөҙ ҡалыу, хатта ки фанилыҡта юғалып, йәмғиәттә онотолған әҙәм сүрәтендә ҡалыуға бәрәбәр.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Стәрлетамаҡтың Ҡала мәҙәниәт һарайында республика муниципаль берәмектәренең V съезы булып үтте. Ултырышта Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле ярҙамсыһы Валерий Савин, Һамар ҡалаһы башлығы Дмитрий Азаров, Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары, бөтә кимәлдәге депутаттар, БР 895 муниципаль берәмек һәм йәмәғәт ойошмаһы вәкиле - йәмғеһе 1150-нән ашыу делегат ҡатнашты. Сығыш яһап, Рөстәм Хәмитов 2015 йылдың 1 ғинуарынан республика бюджетынан ауыл биләмәләренә йыл һайын бүленә торған сараларҙың артыуы тураһында хәбәр итте. Ауыл биләмәләре йылына 400-шәр мең һум түгел, ә 500 мең һум аласаҡ. Быйылдан алып ауыл биләмәләрен коммуналь техника менән тәьмин итеү кеүек тағы ла бер булышлыҡ формаһы эшләй башланы.

✓Чолпон-ате ҡалаһында (Ҡырғыҙстан) Башҡортостан башлығы Рөстәм Хәмитов менән Ҡырғыҙстан Республикаһы Президенты Алмазбек Атамбаевтың осрашыуы уҙҙы. Шул уҡ көндө Башҡортостан етәксеһе Ҡырғыҙстан Республикаһы Сауҙа-сәнәғәт палатаһы ағзалары менән осрашты, шулай уҡ Ҡырғыҙстандың эшлекле даирәһе өсөн Башҡортостан Республикаһының презентацияһы уҙҙы. Билдәләнеүенсә, 2013 йылда Ҡырғыҙстан Республикаһынан Башҡортостан иҡтисадына 1,7 миллион АҠШ доллары күләмендә инвестициялар ингән. Башҡортостан территорияһында Ҡырғыҙстан капиталы менән булдырылған һәм күмәртәләп сауҙа, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә мәшғүл булған дүрт предприятие эшләй.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса өс яҡлы республика комиссияһы ултырышы уҙҙы. БР Премьер-министр урынбаҫары - комиссия координаторы Лилиә Ғүмәрова тәүге ярты йыллыҡ йомғаҡтары буйынса республика халҡының йән башына уртаса аҡсалата килеме 22153 һум тәшкил итеүен һәм уҙған йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда уртаса Рәсәй кимәлен 1,4 процент пунктына уҙып, 8,3 процентҡа артыуын хәбәр итте. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, республикала йәшәү минимумы күләменән түбәнерәк аҡсалата килем алған халыҡ өлөшө 2013 йылда, 2012 йылдағы кеүек, 10,3 процент тәшкил итә, ул РФ күрһәткестәренән яҡшыраҡ (РФ-ла - 11,1 процент).

**“Башинформ”дан.**

*БАШ ЙОРТТА*



# ИХТИРАМЛЫ БУЛЫҒЫҘ...
## ҡатын-ҡыҙҙарға

**Ҡаланың йәмәғәт транспорты ла баш ҡалабыҙҙың йөҙөн билдәләүҙә мөһим роль уйнай. Һәр иртән тығындарға эләгеп, ҡыҫылып, әрләш-талаштар ишетеп эшкә йөрөүгә өйрәнеп тә бөткәнбеҙ инде. Тик транспортта өлкән йәштәге инәйҙәргә, апайҙарға, әсәйҙәргә, бигерәк тә ауырлы ҡатындарға ҡарата булған битарафлыҡҡа һаман күнегеп булмай.**

Беҙ нисек ошо көнгә килеп еттек икән, тип аптыраған бер мин генә түгелдер, моғайын. Пассажирҙарҙың урын бирә белмәүҙәре түгел, хатта теләмәүҙәре тәрбиәһеҙлек, мәҙәниәтһеҙлек билдәһе, тимәк, ата-әсәнең, мәктәптең тәрбиәһе генә етмәй балаларға. Эх, хәҙерге заманға пионер, комсомол ойошмаларының эшмәкәрлеге кәрәк тә бит, юҡ шул.

Әллә ниндәй бәҫһеҙлек баҫты балаларыбыҙҙы, зомби хәлендәге кеүек, телефон менән уйнап, ҡолаҡтарына наушник тығып, йәнәһе лә, берәүҙе лә күрмәй-ишетмәй иҫәнгерәп ултырып баралар. Эргәһендә ике ҡулына ла сумка тотоп торған ҡатын-ҡыҙҙы маңлай күҙе менән дә, күңел күҙе менән дә күрмәйҙәр. Ниндәй йөрәк менән түҙеп ултыралар икән улар? Оялыу тигән төшөнсә яттыр инде уларға. Элек ауылдан килгән йәштәр барыбер ҙә илтифатлыраҡ, транспортта урын бирәләр ине, хәҙер улар ҙа үҙгәргән, "һәр кем үҙ ҡайғыһы" принцыбы менән йәшәй.

Совет заманында һәр транспорт төрөнә лә "Өлкәндәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға урын бир!" тигән иҫкәрмәләр мотлаҡ ҡуйыла торғайны. Ошо эште тергеҙәйек әле, хөрмәтле етәкселәр, ватандаштар! Өфө ҡалаһының транспорт идаралығы етәкселеге, моғайын, был тәҡдимде кире ҡаҡмаҫ һәм бик изге эш башҡарырҙар ине. Бөгөн социаль реклама, тип күп һөйләйҙәр, ә әлеге яҙма бик һәйбәт социаль реклама була алыр ине. Иҫкәрмә ике дәүләт телендә лә яҙылһа, бигерәк шәп. Бөгөнгө көндә бөтөн транспорт сараларына ла теләһә ниндәй иғландар, рекламалар, мәғәнәһеҙ һүҙҙәр йәбештерелеп бөткән. Водителдәр бер ҙә юл хаҡын яҙып ҡуйырға онотмай. Шуның кеүек, ҡала округы хакимиәте "Хөрмәтле пассажирҙар! Ихтирамлы булығыҙ! Өлкәндәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға урын бирегеҙ!" тигән яҙма ла мотлаҡ рәүештә ҡуйылырға тейеш, тигән ҡарар сығарһа ине. Уны, әйҙә, дәүләт автобусына ла, шәхси маршруттарға ла йәбештерһендәр. Халыҡ шул тиклем ҡәнәғәт ҡалыр, был мәҙәниәтлелек, тәрбиәлелек өлгөһө лә булып торор ине. Әзмәүерҙәй ир-егеттәрҙең үҙ теләктәре менән урын бирергә уйҙары булмаһа ла, бәлки, ошо яҙыуҙы уҡығас, йөрәктәрендә изгелек ҡылыу тураһында ниәт уяныр ине. Дәүләттең кешеләр тураһында ҡайғыртыуына ҡыуанып, күптәр ғорурланыр ине. Етәкселәр үҙҙәре ултырып йөрөмәгәс, ҡала транспортында ниндәй тормош ҡайнағанын белмәйҙер, шуға "Киске Өфө" гәзитен уҡып, был мәсьәләне хәл итмәҫтәрме икән?

**Гөлдәр БАТЫРОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

*ҺӨЙӨНСӨ!*

**Ысынлап та күптән көтөлгән бик шатлыҡлы ваҡиға был: "Юлдаш" радиоһын Силәбе, Ҡурған һәм Ырымбур өлкәләрендә тыңлай башланылар. "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһы һәм "СпутникТелеком" асыҡ акционерҙар йәмғиәте араһындағы килешеүгә ярашлы, был субъекттарҙа яңы тапшырғыстар 8-11 сентябрҙән файҙаланыуға тапшырылды.**

# "ЮЛДАШ" РАДИОҺЫ...
## Силәбе, Ҡурған һәм Ырымбур өлкәләрендә



Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, илебеҙҙәге башҡорттарҙың өстән бер өлөшө Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәй. Ырымбур, Свердловск, Һамар, Һарытау өлкәләре, Пермь крайы һәм Ҡурған - башҡорттар тығыҙ йәшәгән төбәктәр.

Башҡортостандан ситтә, әммә үҙҙәренең тарихи аҫаба ерҙәрендә йәшәүсе башҡорттарҙың артабанғы социаль-иҡтисади һәм мәҙәни-рухи үҫешен, тыуған яҡ менән бәйләнештәрҙе нығытыу - дәүләт кимәлендәге бурыс. Башҡортостан парламенты депутаттарына Мөрәжәғәтнамәһендә республика башлығы Рөстәм Хәмитов тарихи тамырҙарҙы юғалтыуға юл ҡуймау тураһында белдерҙе. Ә инде бөтөн башҡорт этносын һаҡлауға һәм бөтә яҡлап үҫтереүгә, тарихи тыуған яҡ менән бәйләнештәрҙе нығытыуға тәьҫир итеүсе иң мөһим факторҙарҙың береһе - ул республика телевидениеһы һәм радиоһы тапшырыуҙары менән солғап алыу. Ошо маҡсатта "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһы һәм "СпутникТелеком" асыҡ акционерҙар йәмғиәте араһында йышлыҡ әҙерләү һәм Силәбе, Ҡурған, Ырымбур, Һамар өлкәләре, Пермь крайы тораҡ пункттарында юлдаш элемтәһе объекттарын төҙөү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылғайны. Һәм бына һөҙөмтә: Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районында, Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районында "Юлдаш" радиоһы һөйләй башланы. 8 сентябрҙә Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында, 9 сентябрҙә - Ҡурған өлкәһенең Әлмән һәм Сафакүл райондарында, 11 сентябрҙә - Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районында тапшырғыс эшләй башланы. Шулай уҡ Һамар өлкәһендә тапшырыусы ҡоролманы монтажлау эштәре бара, яҡын арала радиостанция тапшырғыстары Пермь крайында ла урынлаштырыласаҡ.

**“Башинформ”.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# АРТҺА - АРТЫР, ТАРТЫП АЛЫНМАҪ



**Киләһе йылға пенсияның тупланма өлөшөнә иҫәпте ябыу халыҡта борсолоу тыуҙырҙы: был сара кемдәргә ҡағыла? Киләсәктә пенсия күләме кәмейме әллә артасаҡмы? Ни өсөн хөкүмәт нисәнсе тапҡыр инде"уйын ҡағиҙәһе"н үҙгәртергә булды?**

- Бер кем дә пенсияғыҙҙы тартып алмаясаҡ,- тип тынысландыра халыҡты Рәсәй Пенсия фонды башлығы Антон ДРОЗДОВ. - Ул түләнеп килә һәм түләнәсәк. Һәм йыл һайын ул инфляция кимәленә ярашлы артып барасаҡ. Әлеге пенсионерҙар өсөн бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Буласаҡтары өсөн шулай уҡ насар яҡҡа үҙгәреш көтөлмәй. Пенсия тупланмалары тураһында һүҙ алып барғанда, мәсьәлә фәҡәт 1967 йыл һәм унан һуң тыуған граждандарға ғына ҡағыла, сөнки уларҙың страховка һәм тупланма пенсияларын ғәмәлгә ашырыу ҡарала, ә 47 йәштәгеләр һәм унан өлкәндәрҙең - страховка өлөшө генә. 2015 йылға шундай ҡарар ҡабул ителде: эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәр иҫәбенә күсергән бөтөн взнос тулыһынса страховка пенсияһына китәсәк. Әйткәндәй, пенсия тупланмаларын дәүләттеке булмаған пенсия фондтарына һәм идарасы компанияларға күсереүгә бындай мораторий быйыл да ғәмәлдә. Был пенсия тупланмаларын гарантиялаусы яңы система индерелеү менән бәйле. Яңы системала эшләү хоҡуғы алыр өсөн дәүләттеке булмаған пенсия фондтары Рәсәй Банкы тикшереүе аша үтергә бурыслы. Был эш 2016 йылдың 1 ғинуарына тиклем тамамланасаҡ. Шуға күрә быйыл был ойошмаларға аҡса күсермәҫкә ҡарар ителде, ә Пенсия фонды уны страховка өлөшөнә йүнәлтә бара.

РФ-һы Президенты хөкүмәткә пенсия тупланмаларының һаҡланыуын гарантиялауҙы бурыс итеп ҡуйҙы. Хәлдәр ниндәй генә үҙгәрештәр кисергән осраҡта ла пенсия тупланмаларын түләү күсерелгән взностар суммаһынан кәм булырға тейеш түгел. Ҡайһы берәүҙәр, тупланма пенсияны, ғөмүмән, юҡҡа сығарасаҡтар икән, тигән уйҙырма сығарған. Асылда, бында һүҙ уны бөтөрөү түгел, ә закон нигеҙендә ирекле форматҡа күсереү хаҡында бара.

Шуныһын әйтеп китеү ҙә кәрәк: быйыл граждандарҙың ошоға тиклем төрлө формулалар буйынса (2002 йылға тиклем һәм унан һуң) иҫәпләнгән пенсияға хоҡуҡтары дөйөм нигеҙгә, йәғни пенсия коэффициенты - балдарға күсереләсәк. Шул уҡ ваҡытта пенсия хоҡуҡтары һаҡланып ҡаласаҡ. Рәсәй Пенсия фонды сайтында һәр кем өсөн шәхси кабинет асыу ҡарала. Һәр кем унда инеп, буласаҡ пенсионер буларак, үҙенә күпме балл иҫәпләнгәнен, ни саҡлы пенсия эшләгәнен ҡарай аласаҡ. Буласаҡ пенсия күләмен асыҡлау өсөн балдар һанын коэффициенттар хаҡына ҡабатлап, минималь хеҙмәт пенсияһы суммаһын ҡушырға кәрәк буласаҡ. Минималь пенсия күләме лә закон менән нығытыласаҡ. Быйыл ул 3910 һум тәшкил итте. Шулай итеп, бөгөнгө көнгә страховка пенсияһын иҫәпләргә була.

Пенсия системаһында тағы ла ниндәйҙер көтөлмәгән сюрприздар килеп сыҡмаҫмы, тип һорау биреүселәр бар. Мин быға шулай тип әйтер инем: пенсия системаһындағы ошоға тиклем булған үҙгәрештәр, үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, фәҡәт пенсияның артыуына ғына килтерҙе.Беҙҙең төп маҡсат - пенсионерҙың йәшәү минимумына ярашлы пенсия күләмен арттырыу. Бер кемдең дә пенсияға хоҡуғы тартып алынмаясаҡ. Шулай уҡ пенсияһы ла.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Рәсәй Федерацияһының төбәк финанстары менән юғары сифатта идара итеүсе субъекттары иҫәбенә инде. Был РФ Финанс министрлығы тарафынан ойошторолған 2013 йылға мониторинг һөҙөмтәһе. Аңлатыуҙарынса, Башҡортостан рейтингтың юғары баҫҡысын икенсе йыл рәттән биләй. Башҡортостан менән бергә юғары баһаға тағы ла 22 төбәк лайыҡ булған. Рейтингтың икенсе баҫҡысында - төбәк финанстары менән тейешле сифатта идара иткән 54 төбәк, ҡалған алтауҙа (Ҡарасай-Черкес, Дағстан, Ингушетия, Мордовия, Тыва һәм Чукотка автономиялы округы) идара итеү сифаты түбән тип танылған.

✓Эконом торлаҡтың бер квадрат метрына яҡынса хаҡ 31-34 мең һум күләмендә билдәләнгән. Был турала БР Дәүләт Йыйылышының комитет ултырышында Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Камил Мансуров хәбәр итте. "Эконом торлаҡ төҙөү өсөн Өфө районында өс ер участкаһы һайланған, - тип хәбәр итте Камил Мансуров. - Граждандар өсөн торлаҡтың хаҡын түбәнәйтеү маҡсатында ғәҙәттәге аукциондар урынына "голланд" аукциондары механизмы ҡулланыласаҡ. Бындай аукционды үткәреү механизмының үҙенсәлеге - эконом торлаҡтың бер квадрат метрының хаҡын түбәнәйтеү". Башҡортостан Хөкүмәте Өфө районында 9-12 мең кешегә иҫәпләнгән эконом класлы 3 000 таун-хаус төҙөү буйынса проектты тормошҡа ашырырға ниәтләнә.

✓Өфөлә санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса экологик айлыҡ башланды. Айлыҡ сиктәрендә аҙна һайын баш ҡаланың предприятиелары һәм ойошмалары араһында "санитар йомалар" ойоштороласаҡ. 27 сентябрҙә өфөләр дөйөм ҡала өмәһенә сығасаҡ. Экологик айлыҡ 10 октябргә тиклем дауам итәсәк

✓Башҡортостанда был аҙнала йылы һәм ҡоро һауа торошо көтөлә. Рәсәй Гидрометеорология үҙәгенең мәғлүмәттәренә ярашлы, 8 сентябрҙән алып 12-нә тиклем республика территорияһында яуым-төшөм көтөлмәй. 13 һәм 14 сентябрҙә бер аҙ ямғыр яуыуы ихтимал, көндөҙгө һауа температураһы 20 градусҡа тиклем күтәреләсәк, төндә шулай уҡ йылытасаҡ - 7-9 градусҡа тиклем.

✓13-14 сентябрҙә Өфөлә сираттағы йәшелсә һәм бал йәрминкәләре үтә. Бындай традицион йәрминкәләр 2 ноябргә тиклем дауам итәсәк. Уларҙа республиканың ауыл хужалығы етештереүселәренең ит, ит ризыҡтары, һөт һәм һөт ризыҡтары, картуф, йәшелсә, балы һатыласаҡ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БУЛАСАҠ ЮРИСТАРҒА...

## Мәскәү ҡунағының һабаҡтары



**Мәктәптәрҙә, башҡа белем биреү учреждениеларында яңы уҡыу йылы башланды. Белем көнө уҡыусылар, студенттар хәтерендә оҙаҡҡа һаҡланһын өсөн Сибай ҡалаһы етәкселеге тарафынан да төрлө саралар, осрашыуҙар уҙғарылыуы матур йолаға әйләнгән.**

БДУ-ның Сибай институты студенттары өсөн быйылғы уҡыу йылы айырыуса иҫтәлекле башланды. Юридик факультет студенттарына беренсе лекцияны Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты, юридик фәндәр докторы, профессор Павел Владимирович Крашенинников үҙе уҡыны. Ҡунаҡты "Эшлекле Рәсәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Андрей Назаров, Өфө юридик институты начальнигы, юридик фәндәр докторы, профессор Фәим Мөхәмәтшин, БР Адвокаттар Палатаһы рәйесе Булат Йомадилов оҙатып йөрөнө.

Дәрестең темаһы "Милеккә хоҡуҡ һәм уны көйләүҙә үҙгәрештәр" тип билдәләнде. Павел Владимирович ағымдағы йылдың беренсе сентябренән Рәсәйҙә ошоға тиклем йәшәп килгән милек законына үҙгәрештәр, РФ Граждандар кодексына өҫтәмәләр индерелеүе хаҡында хәбәр итте. Лекторҙың теоретик яҡтан әйткән һәр фекере, һәр һүҙе ысынбарлыҡта булған миҫалдар менән дәлилләп барылды, шуға ла уның дәресе бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булды. Лекция һуңында Павел Владимирович, закон сығарыу эшенә туранан-тура бәйле кеше булараҡ, Рәсәй кимәлендә ҡабул ителгән ҡайһы бер норматив хоҡуҡи акттарҙы ҡарау, тикшереү, ҡабул итеүҙең серҙәре менән бүлеште. Тәү ҡарашҡа ҡатмарлы кеүек булһа ла, студенттар күтәрелгән дәрес темаһын ҡыҙыҡһынып ҡабул итте, Мәскәү ҡунағына үҙҙәрен борсоған һорауҙарҙы яуҙырҙы. Буласаҡ юристарҙы Украинала барған ваҡиғалар, Ҡырымдың Рәсәйгә ҡушылыуынан һуң милектең торошо кеүек мәсьәләләр ҙә ҡыҙыҡһындырҙы. Студенттар менән хушлашып, Павел Владимирович буласаҡ юристарҙы Дәүләт Думаһына практика үтергә килергә саҡырҙы.

- Сибай институты етәкселеге Дәүләт Думаһы депутаттары менән булған ижади хеҙмәттәшлекте юғары баһалай һәм ул киләсәктә лә емешле дауам итер, тип ышана, - тине үҙенең сығышында уҡыу йорто директоры, профессор Зиннур Йәрмөхәмәтов.

**Рәүилә ХӘСӘНОВА.**

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ҺӨНӘРЕ БАР МАЛ ТАБЫР

**Яратҡан шөғөлөгөҙҙө аҡса эшләү сығанағына әйләндерегеҙ - шул саҡ һеҙ отасаҡһығыҙ, тиҙәр. Ысынлап та, күңел яткан эште эшләүе оло кинәнес, ҡәнәғәтләнеү тойғоһо килтерә. Бөрйән районы оҫталары был хәҡиҡәткә күптән төшөнгән.**

Яңы Мөсәт ауылынан Дамир Уразаев ағастан юнып, төрлө сувенирҙар яһай, Бөрйән ерен төйәк иткән ниндәй генә ҡыр йәнлектәренең, урман хужаһы - Айыуханды ң һындары юҡ унда! Төрлө ҙурлыҡтағы бал батмандары, һауыт-һаба, ҡалаҡтарҙы оҫта буш ваҡыттарҙа кис ултырып йүкә, имән ағастарынан юнып эшләгән.

- Хәҙер бер-нисә йыл булышам был шөғөл менән, һорауҙар күп булғас, заказға ла эшләйем, - ти Дамир Уйылдан улы. - Туристик туҡталҡаларға алып барып һатам, күпме булһа ла, яратҡан эшемдән килем бар. Бына был бөләкәй айыу һындарын 150 һум, ҙурыраҡтарын 300-гә биреп ебәрәм. Ғәҙәттә, бәләкәй сувенирҙар зауыҡлы, ыҡсым да күренә, үтемлерәк тә була.

Ә бына Ғәлиәкбәр ауылы оҫтаһы Самат Ғәбитов йүкәнән ҡымыҙ, буҙа, бал өсөн төрлө һауыттар эшләп һата икән.

- Бер мискәне эшләү өсөн генә лә ай ярым ваҡыт китә, сөнки уның төбөн ҡуйғас, яйлап киптереп алырға кәрәк. Һауыттарҙың ҙурлығы ағастарҙың киңлегенән тора, ә бына уны һайлағанда ҡыуышлыларын ҡарап ҡырҡам, - тип һөйләй оҫта. - Халыҡ күберәк ҙур һауыттарҙы ала, быйыл йөҙ литрлыҡты алып киттеләр. Үҙебеҙҙең яҡтарға осһоҙораҡ хаҡ менән һатам, ә аҡсалыраҡ кешеләр үҙҙәре лә ҡиммәт хаҡ бирәләр. Беҙҙең башҡорт халҡы егәрле, ошоноң кеүек эштәргә бигерәк тә оҫта бит ул. Тик дәрт менән дарман ғына кәрәк, яратҡан шөғөлөңдә аҡса табыу ысулына әйләндереп ебәреүе ауыр түгел.

Бөрйән оҫталарының ижад емештәренә ҡарап һоҡланып бөтөрлөк түгел, ә иң мөһиме - улар сифатлы эшләй.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



АБАЙ БУЛ!

# ЯЛҒАНДЫҢ АЯҒЫ ҠЫҪҠА

**Өфөлә түләүһеҙ иғландар аша эш итеүсе алдаҡсылар тағы йөнләнде. Беҙ улар хаҡында быйыл февралдә яҙып сыҡҡайныҡ инде. Шунан бирле уларҙың "эш алымы" бер ҙә үҙгәрмәгән.**

Билдәһеҙ кешеләр интернет-ресурстарҙа буш вакансиялар тураһында иғлан ҡалдыра һәм арзан хаҡҡа эшкә урынлашыуҙа ярҙам вәғәҙә итә. Был йәһәттән 3-6 мең һум самаһы аҡса, йә булмаһа, уның эквиваленты... спиртлы эсемлектәр менән иҫәпләшеү мөмкинлеге тураһында һүҙ бара. Ошо ғына мәғлүмәт тә эш эҙләүселәрҙә шик тыуҙырырға тейеш тә бит, ләкин алдаҡсылар тоҙағына эләгеүселәр һаны арта ғына бара. Күрәһең, ялғандың күренеп торған "йөй"ҙәрен күҙгә элмәүселәр байтаҡ әле арабыҙҙа.

Әйткәндәй, хеҙмәткәрҙәр эҙләүсе ойошма сифатында (һуңғы ошондай осраҡта водитель вакансияһы хаҡында һүҙ барҙы) Өфө ҡала округы хакимиәте күрһәтелгәйне. Был иғланды биргән кеше үҙенең телефон номерын яҙып, осрашыу урынын хакимиәт бинаһы алдына тәғәйенләгән хатта. Бының менән ул, йәнәһе лә, ҡала хакимиәте даирәһенә яҡын кеше булыуын күрһәтергә теләгән. Һөҙөмтәлә "эшмәкәр" был ҡылығы өсөн тейешле "хаҡын"алғас, тиҙерәк тайыу яғын ҡараны.

Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте граждандарҙы, ошондай иғландарға тап булған хәлдә, полицияға шылтыратыуҙарын һорай. Алдаҡ юл менән аҡса һуғыусыларға ҡарата Енәйәт кодексы статьяларын бөрәү ҙә гәмәлдән сығармаған әле.

Ялғандың ҡойроғон нисек тоторға? Беренсенән, муниципалитет хеҙмәткәрҙәрҙе бер ҡасан да түләүһеҙ сайт аша эҙләмәй. Бындай маҡсаттарҙа Өфө ҡала округы хакимиәтенең рәсми сайты файҙаланыла. Иғланда тейешле белгестең исем-фамилияһы, вазифаһы яҙылып, эш телефоны бирелә. Кеҫә телефоны номерының бирелеүе генә лә кешелә шик тыуҙырырға тейеш. Шуныһы ла яҡшы билдәле: эш эҙләүсе менән урамда түгел, ә кадрҙар бүлегендә осрашып һөйләшәләр. Ахыр сиктә, әлеге иғландағы матди түләү тураһындағы юлдар уның авторы менән, ғөмүмән, аралашыу теләген юҡҡа сығарырға тейеш ине.

Ҡала округы хакимиәте граждандарҙы тағы бер тапҡыр абай булырға, алдаҡсылар хәйләһенә эләкмәскә саҡыра. Бындай иғландарға ҡарата талапсан һәм иғтибарлыраҡ булыуығыҙ һеҙгә күңел тыныслығын һаҡларға һәм аҡсағыҙҙы янда ҡалдырырға ярҙам итер.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Әлморон

❖ Ҡан әйләнешен яҡшыртыу өсөн: 40-50 грамм әлморон емешенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 8-12 сәғәт урап төнәтергә. Һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан эсергә.

❖ Миокардиодистрофия: 3 ҡалаҡ әлморон емешенә 600 мл ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утта 10 минут ҡайнатырға, бал өҫтәргә һәм көнөнә 2 тапҡыр ярты стакан эсергә.

❖ Атеросклероз, анемия, йөгошло ауырыуҙар мәлендә: 2 ҡалаҡ әлморон емешен ваҡлап, 400 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 12-15 минут талғын утта тоторға, һыуытырға, һөҙөргә. Көнөнә 2 тапҡыр 100-150 мл эсергә. Балаларға дозаны ике тапҡыр кәметеп бирергә.

❖ Тире ауырыуҙарында һәм күҙ шешкәндә: 80 грамм гөлйемеш сәскәһенә 1 стакан һыу ҡойоп, ярты сәғәт ҡайнатырға. Ошо һыу менән йыуынырға.

❖ Бөйөр ауырыуҙарынан: 2 ҡалаҡ гөлйемеш тамырына 400 мл һыу ҡойорға, ҡайнатып сығарырға, утты һүндереп, 10-15 минут плитәлә тоторға. Бер тәүлек эсендә эсеп бөтөргә, йылытып эсеү файҙалыраҡ. Был төнәтмәне фалиж һуҡҡанда, аяҡтар һыҙлағанда ваннаға өҫтәйҙәр.

### Мышар

❖ Сөйәлде бөтөрөү өсөн уға 8-10 көн буйы мышар емешен бәйләргә.

❖ Анемия: 2 балғалаҡ мышар емешенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ Мышарҙа каротин күп. Витаминлы сәй әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ киптерелгән мышарға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термосҡа 12 сәғәт төнәтергә. Түмен яҡшыртыу өсөн шәкәр, бал өҫтәргә була. Ҡан тамырҙары һығылмалылығын юғалтҡан саҡта яңы һығылған мышар һутын көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ревматизм: 4 ҡалаҡ мышар һутына шул уҡ күләмдә һөт, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан ярты сәғәт алда эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АШТАН ОЛО БУЛМА!

**Башҡорт борондан ризыҡҡа ихтирам менән ҡараған. Халыҡ ижады, бөгөнгө көндә үткән экспедицияларҙа тупланған мәғлүмәттәр ҙә ошо турала һөйләй.**

"Аштан оло булма" - ошо яҙылмаған ҡанунға башҡорт халҡы гел тоғро. Тәҡдим ителгән ризыҡтан баш тартыу шулай уҡ ярамаған эш һаналған, "Аштан оло булма", "Һыйлағанда һыу булһа ла эс", тигәндәр. Алдыңдағы ашты хурлау тыйылған, ашап туйғас: "Ашың ҡайтһын ашыңа, бәрәкәт ауһын башыңа", - тип, рәхмәт әйткәндәр.

Ризыҡ әҙерләгән ерҙә, ашаған мәлдә ҡысҡырып һөйләшмәйҙәр, ризыҡты ташлау шулай уҡ тыйыла. Яңылыш төшөп киткән ризыҡты, таҙартҡандан һуң ашарға ярай йәки уны малға ашатырға кәрәк. "Әгәр ҙә ризыҡ киҫәге төшөп китә икән, уны шайтанға ҡалдырмайынса, таҙартып, ашап ҡуйһын", тиелә бер хәҙистә. Ташланған йәки төшөп киткән ризыҡ киҫәге ҡырҡ көн буйына ҡарғыш ебәреп ята, тигән ышаныу бар. Икенсе яҡтан, иртә таң менән иҙәнгә ризыҡ төшөп китһә, ул тағы ла артасаҡ, тигән ышаныу ҙа йәшәй.

Ҡоҙоҡҡа эйелеп ҡысҡырырға, усаҡҡа, ҡоҙоҡҡа, шишмәгә, ашҡа төкөрөргә ярамай. "Төкөрмә ашыңа, ут сығар ҡашыңа", ти мәҡәл дә. Әгәр ҙә кеше был тыйыуҙарҙы боҙһа, мәҫәлән, утҡа төкөрһә, уның ауыҙы боҙола, тиҙәр. Уны утҡа бер аҙ һары май ташлап ҡына дауалап була.

Кеше ғүмеренең оҙайлығы уға тәғәйенләнгән ризыҡ күләме менән үлсәнә. "Ризыҡы бөтмәйенсә, кеше үлмәй", "Һәр кешене үҙ ризығы йөрөтә", "Донъяға һәр кеше үҙ ризығы (өлөшө) менән тыуа", тигән әйтемдәр ошо турала һөйләй. Ислам дине таралғандан һуң, ризыҡ - ул Аллаһы Тәғәләнең бүләге, ул һәр ваҡыт фәрештәләр ҡанаты аҫтында, тип ышанғандар.

Ашаған саҡта ҡабаланырға, ашалып бөтмәгән киҫәк ҡалдырырға ярамай, бәхет, һаулыҡ, бәрәкәт ризыҡтың һуңғы ҡабымында була. "Биргән ашты ашап бөтөр, бәхетеңде ҡалдырма", тиҙәр. Кемдеңдер ашап бөтмәгән ризығын ашап ҡуйыу тыйыла. "Ямандан бер ҡалаҡ аш ҡала", тип, был тыйыуҙы ла мәҡәл менән нығытып ҡуйғандар. Әгәр ҙә иртәнге аш мәлендә икмәк киҫәген ашап бөтмәй ҡалдырһаң, икенсе яртыһындан (ирендән, ҡатыныңдан) яҙаһын.

Ниндәйҙер мөһим байрамға әҙерләнгән, күмәкләп йыйылған, ҡорбан ителгән ризыҡтар айырыуса баһаланған. Был ризыҡтарҙы ашау өсөн йыйылған табын да үҙенсәлекле йолалар менән байытыла. Мәҫәлән, унда саҡырылған ҡунаҡтар йәмғиәттәге социаль хәленә ҡарап, төрҡөмләп ҡор яһап ултыра.

Йола аштарында ит менән һөт ризыҡтары ҙур урын алып тора. Ғаилә һәм мигрел йолаларын үткәргәндә, шулай уҡ бәрәкәт, муллыҡ һорағанда, тәбиғәт көстәрен туктатыу маҡсатында, рухтарға бағышлап аяттар уҡығанда тап ошо ризыҡтар ҡулланылған. Башҡорттарҙың тормошона Ислам диненең ныҡлап инеүенән һуң да был ризыҡтар үҙенең статусын юғалтмаған, киреһенсә, улар мосолман йолаларына ла үтеп ингән.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ҘУР ЕҢЕҮҘӘР...

## үҙеңде еңеүҙән башлана



(Башы 1-се биттә).

### Ата-бабаларым да, мин дә көрәшсе

Көрәш менән шөғөлләнә башлауымдың тарихы ярайһы ҡыҙыҡ ҡына. Ябай башҡорт ғаиләһенәнмен, атайым Валерий Ғәли улы милли көрәш буйынса тренер, махсус рәүештә ниндәйҙер ярыштарҙа ҡатнашып йөрөмәһә лә, һабантуйҙарҙа көрәшеп дан алған кеше. Әсәйем балалар баҡсаһында тәрбиәсе. Ғаиләлә ике егет үҫтек, өлкән ағайым Вадим көрәшсе булырын бәләкәй сағынан уҡ белеп, мәктәпкә уҡырға бармаҫ элек уҡ майҙандарҙа көрәшеп йөрөнө. Минең иһә көрәшсе булыу уйы башыма инеп сыҡҡаны ла булманы. Ғөмүмән, атайым, тренер булһа ла, улдарым мотлаҡ көрәшсе булһын, тигән ҡәтғи ҡарар менән тәрбиәләмәне беҙҙе. Мине үҙ теләгемә ҡуйҙылар. Тәүҙә саңғыла йөрөнөм. Көрәш - ул йәрәхәттәр хәүефе көслө булған спорт төрө, үҙе лә саңғысы булған әсәйем кинйәкәү улының көрәшеп, тукмалып, йәрәхәтләнеп түгел, ә саңғыла шыуып йөрөүе менән иҫ киткес ҡәнәғәт ине. Тик мин саңғы ярыштарына барғанда тышта тороп, ныҡ өшөй инем, саңғы спортының шуныһын бигерәк яратманым.

Өсөнсө класты тамамлағас, ағайым менән Себерҙә йәшәгән туғандарыбыҙға ҡунаҡҡа барҙыҡ та, һабантуй байрамына эләктек. Атайымдың ҡустылары көрәш тә көрәш, тип, мине майҙанға сығарҙы, буйы минән дә бәләкәйерәк булған малайҙан еңелеп тә ҡуйҙым. Ошо ваҡиғанан һуң ғәрләндем, ҡайтҡас та атайыма, мин көрәш менән шөғөлләнә башлайым, тинем. Башта саңғыға ла, көрәшкә лә йөрөнөм. Йәйләп көрәш тулыһынса зиһенемде биләне. Бигерәк тә уның егет кеше өсөн кәрәк булған иң мөһим сифатҡа - сәмле булыуға өйрәтеүен юғары баһалайым. Нәҫелебеҙҙә билдәле көрәшселәр ҙә байтаҡ, олатайымдың ҡустыһы Рафаиль Зөлҡәрнәйевты кешеләр һаман иҫкә ала. Ауырлығы етмеш килограмм ғына булһа ла, үҙенән күпкә ауырыраҡ көрәшселәрҙе еңер булған ул. Көс беләктә түгел, йөрәктә икәнен мин дә беләм хәҙер.

### Үҙеңә талап юғары булһын

Беренсе тапҡыр ярышҡа дүртенсе класта, Ҡыйғы районы үҙәгенә барҙым. Беҙ мәктәптә уҡығанда районда милли көрәш менән шөғөлләнеүсе уҡыусылар һаны ла күп ине. Ул ваҡытта район ярыштарында 8-әр кеше менән көрәшергә тура килә ине. Шул саҡта беренсе тапҡыр икенсе урын яуланым, минең өсөн был ҙур шатлыҡ булды.

Спорт залынан киске алтынан туғыҙға тиклем сыҡмайбыҙ. Мәктәптә дәрестәр ваҡытында ла күнекмәләрҙе генә уйлап ултыраһың. Уҡыуҙа насар өлгәшәһең икән, күнекмәләргә индермәй торғайны атайым, ул саҡта китап уҡып, өйҙә ултырып ҡалам. Шуға башҡа был хәлгә тарымаҫ өсөн тырышып уҡыйһың. Көрәш секцияһында шөғөлләнеүселәр араһында һәләтле көрәшселәр күп ине. Күптәре ситкә уҡырға, эшләргә китеп, көрәште дауам итмәне. Ә ул саҡта барыбыҙ ҙа тигеҙ көрәшә инек, тимәк, шарттар булғанда, улар күптән чемпион исемен яулап бөткән булыр ине. Класташым Вилдан Рауилов 2013 йылда Ҡаҙанда үткән Рәсәй беренселегендә икенсе урын алды, финалда Сыуаш Республикаһы егете ун секунд ҡалғас, уны еңеп ҡуйҙы. Һәр спорт төрөндәге кеүек, уңыштың йылмайыуы ла кәрәк шул.

Төрлө чемпионаттарҙа Башҡортостан көрәшселәренең төп дәғүәселәре - Татарстан егеттәре. Нисә йыл Рәсәй беренселегендә ҡатнашам, команда иҫәбе буйынса улар гел беренсе, беҙ - икенсе урында. 2013 йылда республиканан 5 кеше чемпион булды шулай ҙа, быны ла алға китеш, тип иҫәпләргә кәрәк. Күрәшеләрҙә дәүләт ярҙамы ла көслө, тик уларҙа тағы бер мөһим әйбер бар - көрәшселәрҙең үҙҙәренә ҡуйған талабы юғары. Мәҫәлән, шул уҡ Рәсәй беренселегенә һайлап алыу мәлендә беҙҙә 150 көрәшсе ҡатнашһа, уларҙа 450-500 кеше. Йәғни, үҙ-ара ярыш сәме көслө булыуы көрәшселәрҙе ялҡауланырға ирек бирмәй. Улар күнекмәләргә ваҡытты күберәк булергә мәжбүр, сөнки спортсы саҡ ҡына теҙгенде бушатһа, икенселәр уны үтеп тә китә. Сәм һәм конкурентлыҡ көслө булғанға ла унда чемпиондарҙың исемдәре үҙгәреп тора, был иһә йәш көрәшселәргә стимул бирә, ул үҙе лә чемпион булырға ынтыла.

Республикала вуздарҙа, башҡа урта белем биреү учреждениеларында көрәш секциялары әүҙем эшләй. Былтыр йыл аҙағында вуздар араһында ярыш үткәйне, ун вуз араһынан БДАУ - беренсе, БДУ - икенсе, Стәрлетамаҡ физик культура институты өсөнсө урынды алды.

### Бразилияла донъя чемпионы булдым

Үҙем өсөн бик тә әһәмиәтле булған тәүге еңеүемдән һуң зона ярыштарында ҡатнаштым. 2009 йылда Мәктәп уҡыусылары спартакиадаһында чемпион исемен яуланым. Шул йылда уҡ булһа кәрәк, Башҡортостан Республикаһы беренселегендә беренсе урын яуланым һәм республика командаһына инеп, Ҡаҙанға Рәсәй беренселегенә киттем. Шул рәүешле, 2010 йылда беренсе тапҡыр Рәсәй чемпионы булдым, ул саҡта минә 15 йәш ине. Ағайым 2006 йылда Рәсәй чемпионы булғайны, был беренселектә ул икенсе урынға лайыҡ булды. 2012 йылда Марий Эл республикаһында Рәсәй беренселегендә милли көрәш һәм билбаулы көрәштә еңеп, Бразилияға, Сан-Паулу ҡалаһында үҫмерҙәр араһында үткән донъя чемпионатына барҙым. Был чемпионатта мин милли көрәш һәм билбаулы көрәш буйынса донъя чемпионы исемен яуланым. Унда 15-ләгән илдән көрәшселәр ҡатнашты, Башҡортостанды, Өфөнө бик яҡшы беләләр - бында беҙҙең көрәшселәрҙең дә өлөшө бар.

Күнекмәләрҙә милли көрәш буйынса ғына түгел, билбаулы көрәш менән дә шөғөлләнәбеҙ. Был көрәш төрҙәре шуныһы менән айырыла: милли көрәштә тыйылған нәмәләр билбаулы көрәштә рөхсәт ителә. Мәҫәлән, дәғүәсеңде аяҡ салып йығылтһаң, һин еңәһең, милли көрәштә дәғүәсеңде күтәрергә кәрәк. Ҡайһыһы еңелерәк икәнен дә әйтә алмайым, һәр хәлдә, билбаулы көрәш беҙҙең башҡорттоң тәбиғәтенә ятып бөтмәй ул. Беҙ бит хәйләләшә белмәйбеҙ. Шулай ҙа был көрәш төрө беҙгә, башҡорт егеттәренә, ниндәйҙер ярыштарҙа ҡатнашырға, урындар, дәрәжәләр яуларға мөмкинлек бирә икән, асылыбыҙға тура килмәй, тип, унан баш тартыу дөрөҫ түгелдер, моғайын.

### Егет кеше үҙ абруйын үҙе яулай

Спортта һәр ваҡыт үҙеңде раҫлап торорға тура килә. Әле 70 кг ауырлыҡта көрәшһәм, хәҙер йәйләп ауырлығым арта, тимәк, тағы яңы кимәлдә ярышырға, еңергә тура киләсәк. Вузда уҡыу ваҡытта күп алһа ла, күнекмәләргә йөрөргә тырышам. Спорт бит ул ихтыяр көсө тәрбиәләй, спорт залына барғың килмәгән саҡта ла бараһың. Еңеүсе булыр өсөн иң тәүҙә үҙеңде еңергә кәрәк.

Ярыштарҙы видеоға төшөрөп алып ҡайтабыҙ, шунда атайым менән тағы бергә ҡарап сығабыҙ. Ә былай беҙҙең ғаиләлә бергә йыйылған саҡта көрәш тураһында һөйләшеү ғәҙәти күренеш түгел. Һәр тренер үҙ тактикаһы менән күнекмәләр үткәрә, шулай ҙа үҙем өсөн атайымдыҡы иң ҡулайлыһы икәненә инанғанмын, Рәсәй чемпионатына ла шуның буйынса әҙерләндем. Атай күнекмәләрҙә, тегеләй, былай эшләмә, тип тыймай, иң мөһиме, аҡыл ҡулланығыҙ, ти.

Тренер булараҡ, атайым беҙҙең уңыштарыбыҙ менән ғорурланалыр ҙа, тик быны беҙгә күрһәтеп, бер туҡтауһыҙ маҡташып ултырмайбыҙ. Бөтөн миҙалдарыбыҙ, кубоктарыбыҙ өйҙә һаҡлана, уларҙа әсәй менән атайҙың өлөшө ҙур. Маҡтанып йөрөмәгеҙ, тип, тәкәбберлек кеүек насар сифаттан да аралап торалар, үҙҙәрендә лә ундай холоҡ юҡ. Ҡайһы бер спортсылар еңеү яулағандан һуң эреләнеп, үҙгәреп китә. Минеңсә, был уны йәмләмәй, киреһенсә, ундай кеше үҙенә булған ихтирамды юғалта. Ир-егет өсөн беләк көсөнән тыш, аҡыл көсө лә кәрәк, ул үҙ абруйын үҙе яулай. Аҡылы булған кеше киләсәгенә лә яуаплы ҡарай, сәләмәт йәшәү рәүеше алып бара. Ошо йәшемә тиклем ауыҙыма бер тапҡыр спиртлы эсемлек алғаным юҡ, тәмәке лә тартмайым. Ағайым да эсмәй ҙә, тартмай ҙа. Көрәшсе егеткә матурлыҡ өҫтәмәй был зыянлы ҡылыҡтар, тәнде генә түгел, күңелде саф тотоу мөһим, шул саҡта уңыш та һиңә гел йылмайып торасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Еңеү дәрте һәр кешелә бар. Әммә көс табып, үҙеңде камиллаштырыу өҫтөндә эшләү - һәр кеше өсөн хас түгел. Артур әйтмешләй, еңеү - ул намыҫ тойоһо ла. Әңгәмәләшкән саҡта еңеүҙәренең артында ауыр көс ятҡанлығын телгә алмағанға күрә, көрәштә еңеүҙән дә еңелерәк нәмә юҡ кеүек тә тойолғандыр, шулай ҙа уныш осраҡлы кешеләргә түгел, ә тырыштарға ғына килә. Һүҙ ахырында Артур Зөлҡәрнәйевтан бер теләк: "Әгәр ҙә тормоштоң мәғәнәһе юҡ кеүек тойолһа - спорт менән шөғөлләнегеҙ, кәйефең булмаһа - спорт менән шөғөлләнегеҙ! Физик көстә һәм рухты нығытыу өсөн башҡа сара әлегә уйлап табылмаған".**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ХӘҠИҠӘТ ШУЛАЙ

**Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Үҙәк тарих архивы август айында үҙенең 95 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ошо уңай менән архив хеҙмәткәре Зофәр Ғәбит улы ҒӘТИӘТУЛЛИН ойошманың тарихы, әһәмиәте, бөгөнгө көндәге эшмәкәрлеге менән таныштырыуҙы дауам итә.**

# ҮҘӘК АРХИВ...

## боронғолоҡ һағында



### Халыҡты хеҙмәтләндереү

90-сы йылдарҙан һуң, билдәлелек заманы башланғас, элекке һымаҡ сикләүҙәр бөтөрөлдө. Һәр теләгән кеше архивҡа килеп эшләй, эҙләнә ала. Ләкин һуңғы йылдарҙа ғына, шәжәрә төҙөргә, үҙ крайын өйрәнергә теләп архивҡа килеүселәрҙең һаны артыу сәбәпле, бер аҙ сикләүҙәр индерҙек. Сөнки кешеләрҙең күп булыуы арҡаһында ғалимдарға, ғилми эш менән шөғөлләнеүсе студент, аспиранттарға урын етмәй башлағайны. Шуға күрә ситтән килгән кешеләрҙе шәхси ғариза менән июнь-июль айҙарында ғына ҡабул итәбеҙ. Ҡалған ваҡытта төрлө ойошмаларҙың, ғилми үҙәктәрҙең йүнәлтмәһе буйынса ғына эшләргә мөмкин.

Әлеге ваҡытта үҙ эшебеҙҙә интернет селтәрен әүҙем ҡулланабыҙ. Ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе электрон вариантҡа күсереп, сайтыбыҙға ҡуйҙыҡ та инде. Шулай уҡ шәжәрәләрен тергеҙергә теләүселәргә лә архивҡа килеп эҙләнеп ултырыуҙың кәрәге юҡ. "Ревизские сказки"ларҙың электрон күсермәһен интернетта, беҙҙең сайтта табырға була. Әлеге ваҡытта был хеҙмәт бушлай тәҡдим ителә (күп өлкәләрҙә түләүле). 800-ҙән ашыу берәмек "Ревизские сказки" документтарының күп өлөшө электрон вариантҡа күсерелгән, ҡалғандары өҫтөндә эш дауам итә. Әлеге мәлдә 1917 йылда Ваҡытлы хөкүмәт тарафынан үткәрелгән ауыл хужалығын иҫәпкә алыу документтарын электрон вариантҡа күсерәбеҙ. Был кампанияла шәхси хужалыҡ, уның хужаһы (исеме, йәше), ҡатыны, балалары (уларҙың исеме телгә алынмай, йәше генә күрһәтелә) хаҡында мәғлүмәт бирелә. Ауыл хужалығы ҡоралдары, ерҙәренең майҙаны, нимә үҫтерелеүе, малдың һаны иҫәпкә алынған булған. Оҙаҡламай ошо кампания документтарының күсермәләре эшләнеп бөтәсәк, төп нөсхәһе менән тикшеренеүҙәр үткәрелгәндән һуң, сайтҡа ҡуйыласаҡ.

Ғөмүмән, кешеләрҙе хеҙмәтләндереү яҡшы булһын өсөн бар унайлыҡтар тыуҙырырға тырышабыҙ. Беренсе тапҡыр архивҡа килеп ингән кеше документтар менән нисек эшләргә кәрәклеген аңламаясаҡ. Студент йылдарында мин үҙем дә шундай хәлгә ҡалғайным. Күҙҙе бәйләп, ҡараңғы бүлмәгә индереп ебәргәндәр кеүек тояһың үҙеңде, нимәнән башлап китергә белмәйһең. Ошондай хәл булмаһын өсөн архивта һаҡланған фондтар системаға һалына, эҙләү ысулдары камиллаштырыла. Уҡыу залындағы хеҙмәткәрҙәребеҙ кәрәкле документтарҙы табып бирергә ярҙам итә. Шулай уҡ картотекала фондтарҙың теҙмәһе бирелгән, бында фондтарға ҡыҫҡаса байҡау ҙа бар. Был үҙенә кәрәкле темаһы табыуҙы еңеллләштерә. Революцияға тиклемге документтарҙың күсермәһен эшләргә рөхсәт ителмәһә лә, кәрәкле документтарҙы фотоға төшөрөп алырға мөмкин. Ә 1917 йылдан һуңғы документтарҙың күсермәһен дә эшләргә була.

### Белешмәләр әҙерләү

Әлеге ваҡытта архив эшенең күп өлөшөн халыҡҡа справка биреү ала. Пенсия фонды кеше пенсияға сыҡҡанда унан хеҙмәт стажы, эшләгән осорон, эш хаҡын күрһәтеүсе белешмәләр талап итә. Ошо һәм шундай йүнәлештәге башҡа мәсьәләләр менән беҙгә халыҡ күп мөрәжәғәт итә. Былтыр ғына 25 мең белешмә эшләп бирҙек. Ошо справкалар өсөн документтарҙы туплау, уларҙы эшкәртеп биреү күп ваҡытты ала, бөтә хеҙмәткәрҙәр ҙә тиерлек шуның менән мәшғүл.

Архивта төрлө бүлектәр бар. Элек ошо справка эше менән белешмәләр бүлеге генә шөғөлләнгән булған. Ләкин мөрәжәғәттәр артҡан һайын башҡа бүлектәр ҙә ошо эшкә йәлеп ителде. Мәҫәлән, уҡыу залында эшләргә тейешле ике хеҙмәткәребеҙҙең береһе тулыһынса тиерлек справка яҙыу менән генә шөғөлләнә. Кеше ныҡ күп булғанда ғына архивтың уҡыу залына килгәндәрҙе хеҙмәтләндерә. Ә төп хеҙмәткәр көн һайын эш ваҡыты бөткәндән һуң ҡалып, бер нисә справка эшләп ҡайта. Бөтә бүлектәрҙә лә ошо хәл күҙәтелә, шул сәбәпле методик эш менән шөғөлләнеү икенсе планға ҡала килә. Әлбиттә, был беҙгә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ төп эшебеҙҙе эшләргә өлгөрәбеҙ. Мәҫәлән, беҙҙең бүлек йыл һайын документаль йыйынтыҡтар сығарып тора. Зәки Вәлиди, Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл, французларға ҡаршы Ватан һуғышына 200 йыл һәм Беренсе Донъя һуғышы башланыуға 100 йыл тулыуға арналған йыйынтыҡтар баҫылып сыҡты.

### Тарихи ҡомартҡылар йәшеренгән тәрән хазина

Архивтар артабан да ентекле өйрәнеүгә талап итә. Архив документтары күп, башҡорттарға, Башҡортостанға ҡағылышлы матералдар Өфө архивтарынан тыш, башҡа күп ҡалаларҙа һаҡлана. Ғилми эштәр яҙғанда, йыйынтыҡтар әҙерләгәндә бер нисә тапҡыр Мәскәүҙең Сенат архивының боронғо факттар, хәрби тарих бүлектәрендә бер нисә тапҡыр ултырырға тура килде. Унда беҙҙең төбәккә, башҡорттарға ҡағылышлы документтар бихисап. Араларында бөтөнләй өйрәнелмәгәндәре, ғалимдарҙың, тикшеренеүселәрҙең ҡулы теймәгәндәре лә юҡ түгел. Уларҙы табып, халыҡҡа сығарыу өсөн бик күп эшләргә кәрәк әле.

Архив материалдарын өйрәнеү үтә лә мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡ эш. Эҙләнгән саҡта кин массаларға ғына түгел, ә үҙең өсөн ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан документтарға ла юлығаһың. Мин Белорет районынан. Беҙҙең районда күпселекте ҡатай ырыуына ҡараған башҡорттар тәшкил итә. Бер нисә йыл элек ҡатай башҡорттарының аҫаба ерҙәренең сиктәрен һүрәтләүсе документтарға осрауым үҙемә ҙур яңылыҡ булғайны. Күптән түгел, тамъян менән ҡатай башҡорттарының ер арҡаһында килеп тыуған бәхәстәре, бер-береһе менән судлашыуҙары хаҡында документтарға юлыҡтым.

Ғөмүмән, архив ул бик күп тарихи ҡомартҡылар йәшеренгән тәрән хазина. Уны ныҡыраҡ өйрәнгән һайын әле билдәле булмаған, онотолған яңынан-яңы факттар, тарихтың билдәһеҙ биттәре асыла, билдәле биттәре тағы ла ныҡыраҡ тулылана.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ яҙып алды.**


**(Аҙағы. Башы 36-сы һанда).**


БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Ҡунаҡтарға бишбармаҡ тәҡдим ителә, һуңынан кейәү яғынан килтерелгән бүләктәр таратыла. Ҡоҙаларҙы ҡунырға алдан билдәләнгән йорттарға тараталар. Икенсе көнөнә ат һуйып, теләүселәрҙе уның һимеҙлеген "тикшерергә" саҡыралар. Ҡунаҡтар үҙҙәрен нимә көткәнен белһә лә, яҡшы кейемдәрен сисеп, ҡул аҫтында нимә бар шуны кейеп, саҡырыусылар артынан эйәрә. Уларҙы аттың эсәктәрен тотоп көтөп тороусы ҡоҙасалар ҡаршы ала. Ҡунаҡтар күренеү менән, улар бысраҡ эсәктәр менән ҡунаҡтарға ташлана һәм сыр-сыу килеп күңел асалар.

Ҡоҙалар өйҙәренә ике-өс көн ҡунаҡ булғандан һуң ғына ҡайта. Бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң кейәүҙең атаһына ҡунаҡҡа буласаҡ ҡайны менән ҡәйнә килә. Уларҙың килеүенә йорттоң ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ яғында айырым бүлмәләр әҙерләнә. Улар килеп төшкәс, өйҙөң ике яғы ла ҡунаҡтар менән тула. Килендең әсәһе үҙе менән һандыҡ алып килә. Уның иң өҫтөндә яулыҡ, бер-нисә һарауыс, туҡыма, ептәр, төбөндә ҡулдәк була. Һыйланғандан һуң, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙар яғына сыға. Шунда килендең әсәһе ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһенә һандыҡты асырға тәҡдим итә һәм уға ошо хеҙмәте өсөн яулыҡ бирә. Һарауыстарҙы ҡәйнә кеше үҙ ҡулдары менән ҡатын-ҡыҙҙарға тарата, ә йыртыш туҡымаһын ир-атҡа бирә. Быны өсөн улар уға кем күпме булдыра ала, шунса аҡса һала. Ептәрҙе оло йәштәге ҡатын-ҡыҙға тараталар. Улар үҙ сиратында аҡса бирмәй, доға ҡыла. Иң һуңынан кейәүҙең атаһына ҡулдәк кейҙерелә. Үҙ сиратында ул һыйыр, бейә йәки һарыҡ әйтә.

Никах йолаһы дини серлелек һаҡламай, ә гражданлыҡ йолаһы булып иҫәпләнә. Уны мәсетә түгел, өйҙә уҡыйҙар. Ҡайны йортона ҡоҙалар килгәндә саҡырылған оло йәштәгеләр йыйыла. Теркәү кенәгәһен алып мулла килә. Ул кейәүҙең атаһынан улына шул-шул кешенең ҡыҙын кәләшлеккә алырға ризамы икәнлеген һорай. Ыңғай яуап алынғанда, мулла Ҡөрьәндән әҙәктәр уҡый һәм никах килешеүен кенәгәһенә теркәп ҡуя. Муллаға, гәҙәттә, ҡалымдың бер процентын түләйҙәр.

Ижап-ҡабулдан һуң кейәү кәләшен ир сифатында ҡайныһының өйөнә килеп күрә алған. Бындай кейәүҙән йөрөү ҡалымдың яртыһын түләгәндән һәм инә туны бүләк иткәндән йәки ике яҡтың атаәсәләре бүләктәр бирешкәндән һуң мөмкин була.

Кейәүҙең кәләш йортона беренсе тапҡыр килеүе ҡыҙыҡ гөрөф-ғәҙәттәр менән бәйле. Ул кәләшенә, дөрөҫөрәге, ҡатынына эңерҙә, һыбай килә. Әхирәттәре ҡыҙҙы йәшереп ҡуя, һәм кейәү уны эҙләп табырға тейеш. Был эш еңелдән түгел, ә инде кәләште оҙаҡ эҙләү бөтөнләй оят һанала. Шуға күрә ул ауылдың ҡатын-ҡыҙҙарына бүләктәр тарата, улары ҡыҙҙы эҙләргә ярҙам итә. Табылған кәләш кейәүҙән ҡасып урам буйлап йүгерергә, ә кейәү уның артынан ҡыуып етеп, тотоп алып, күпмелер ара күтәреп барырға тейеш була. Ҡулға эләккән ҡыҙ башҡаса ҡаршылашмай, баш баҫып атай йортона эйәрә. Йәштәрҙе ишек алдында ҡатын-ҡыҙҙар ҡаршы ала, уларҙан икәү метр ярымлыҡ оҙонлоҡта туҡыма киҫәге - йыртыш тотоп тора. Кейәү уны, өйгә инер алдынан, аяғы менән баҫып йырта. Йәштәргә айырым бүлмә бүленә - йәйгеһен ул аҡ келәт, ҡышҡыһын буш йорт йәки күршеләренең өйө була. Ҡайны кейәүен үҙ өйөнә индермәй. Сөнки кейәү ҡалымдың ҡалған өлөшөн түләп бөтөрмәйенсә ҡайныһының да, ҡәйнәһенең дә күҙенә күренергә тейеш түгел. Икәүҙән-икәү ҡалғас, кейәү кәләшенә итеген һалдырырға бойора һәм был бурыс һис һүҙһеҙ үтәлә. Һуңынан ул кәләшен ҡосаҡларға маташа, әммә уныһы ситкә тайшана. Шул ваҡытта кейәү кәләшенә көмөш тәңкә бирергә тейеш. Шул саҡта инде кәләш үҙе уҡ кейәүен ҡосаҡлай.

# АҠСАНЫҢ ӘММӘ

**Йыш ҡына тотоп айыу йығырҙай ир-егеттәрҙең ауыҙынан, эш юҡ, тигән зарланыу ишетелһә, ирекһеҙҙән, үҙең баҙап ҡалаһың: ауылдарҙа күпме ерҙәр буш ята, баҡсаңды киңәйтеп булһа ла килем алырға өйрән дә бит. Халҡыбыҙ бит юҡҡа ғына "Ер эшкәрт тә тары сәс, тары булмаһа, барын сәс", тимәгән. Иң тәүҙә ғаиләңә етерлек аҙыҡ-түлек әҙерлә, артып ҡалғанын һатып, аҡса эшлә. Эш юҡ, тип зарланыуҙан ғына, әлбиттә, берәү ҙә эш килтереп тоттормаясаҡ. Тәү сиратта, ялҡаулығыңды еңеп, нимәгәләр тотонорға, юҡтан бар яһарға тырышырға кәрәк. Тырыштарға, ныҡыштарға ҡасан булһа ла уңыш йылмая. Ошо фекерҙе Стәрлетамаҡ районының Мәксүт ауылында йәшәүсе һәм гәзит уҡыусыларға эшҡыуарлыҡ серҙәрен сисеүсе Ҡасим ИШЕМБАЕВтың тәжрибәһе лә раҫлай.**

## Сит ағайға тир түккәнсе...

Нефть химияһы производствоһында эшләй инем, 23 йәшемдә ике баламды етәкләп, саҡырыу буйынса ғаиләм менән Ырымбурға сығып киттем. Унда заводта тиҙ арала абруй яулап, алдынғылар рәтенә баҫып, 24 йәшемдә ике бүлмәле фатирлы булдым. Минең менән күптәр барғайны, улар барыһы ла ҡыйыҡлы булып бөткәнсе тип, теләктәшлек йөҙөнән биш йыл эшләп, оло ҡыҙым беренсе синыфҡа уҡырға барыр ваҡыт еткәс, фатирымды алмаштырып, 1989 йылда Башҡортостанға күсеп ҡайттыҡ.

Стәрлетамаҡта һәр ваҡыт йәйгеһен оҙон сираттар күреп, нимәгә шулай һыу буйы һуҙылалар икән, тип аптырай инем. Баҡтиһәң, шәхси хужалыҡтары булыусылар ҡатнаш аҙыҡҡа сиратҡа теҙелә икән. Социализм ваҡытында малсылыҡ йәмғиәттәре ойошторолоп, улар шәхси хужалыҡтарға ярҙам итә торғайны. Башыма шунда уй керҙе: кеше ас булһа, ул сәй эсеп тә түҙә, ә мал ас булһа, күршенән булһа ла аҙыҡ табып, малын ашатасаҡ. Тимәк, кешегә аҙыҡ кәрәк булған кеүек, мал аҙығы ла һәр саҡ кәрәк. Шунан ситтән тороп Мәләүез ауыл хужалығы техникумына ҡош итен эшкәртеү технологияһы йүнәлеше буйынса - уҡырға, Стәрлетамаҡтың Тәжрибә-сәнәғәт нефть химияһы заводының ул ваҡытта ярҙамсы хужалығы бар ине, шунда эшкә барып индем дә, бер йыл эшләгәндән һуң үҙемә эшләргә ҡарар иттем. Өйҙә шәл, селтәр шәл бәйләп, базарҙа һаттыҡ. Машинка менән шәл бәйләргә өйрәндем, уртаһын бәйләһәм, ҡатыным ситтәрен ҡул менән бәйләй. Шәлдәрҙе күпләп Урта Азияға ташый башланым. Яйлап бол туплағас, иген үҫтереүгә тотондом. Ырымбурҙан Дәүләкәнгә ташып, онға алмаштырып, ул ондо Белорет, Бөрйән, Ишембай райондарына алып барып һаттыҡ. Халыҡ малына ҡатнаш аҙыҡ һорағас, ҡатнаш аҙыҡ етештерә башланым. Буш ҡайтмаҫ өсөн, Бөрйәндән урман ташыным. Стәрлетамаҡта заводтың ярҙамсы хужалығы бөтөрөлгәс, бинаны ҡуртымға алып, элек бергә эшләгән егеттәрҙе йыйып, 500 башлап сусҡа үҫтереп, ит һатырға тотондоҡ. Эш яйланып ҡына киткәндә яңы директор ярҙамсы хужалыҡты һатып ебәрҙе...

## Һәр ҡаршылыҡ - яңы мөмкинлек ул

Халыҡҡа пайҙар бирелә башлағас, ерҙәрҙе баҫып алыуға юл асылды. Ә башҡорттар ғүмер буйы ерҙәре өсөн ҡан түккән. Хәҙер һуғышып булмай, ерҙе закон нигеҙендә алып, шунда ҡайтып эшләргә кәрәк, тип уйланым. Ауылыма ҡайтып, йыйылыш үткәреп, 67 кешенең пайын алдым. Уларҙың барыһын да үҙемдең аҡсаға законлаштырҙым. Документтар юллау өсөн йыл да бер ай ваҡыт китте. Иҫке Т-150 тракторы, бер сәскес һатып алдым. Беренсе (2011) йыл ҡоролоҡ булды. Икенсе йылға ерҙе 750 гектарға еткерҙем. Әлеге ваҡытта сәсеү майҙаным мең гектар. Техниканы яңырттым, фермер хужалығымда биш кеше эшләй. Игенселек менән шөғөлләнә башлағас, үҙемә производство асыу ихтыяжы килеп тыуҙы. Стәрлетамаҡ калаһының ситендә 14 сутый ер алып, тирмәнгә бина төҙөнөм. Унда мини-ҡатнаш аҙыҡ заводы ултыртып, көҙгә эш башларға тип торам.

Башҡорттар элек-электән ырыу-ҡәбилә менән йәшәгән, унда кемдер эште ойошторған, башҡалар ҡушылғанды эшләгән. Колхоз ваҡытында һәр ваҡыт бригадир, колхоз рәйесе ҡарауыллап йөрөнө тиһәң дә була. Шуға күрә миләттәштәрем яңы системаға ҡапыл ғына инеп тә китә алманы, хәҙер ҙә бик аңлап етмәй. Уларға ныҡ ауыр, дөрөҫөн әйткәндә, нимә эшләргә, нимә менән шөғөлләнергә белмәйҙәр. Күптәр Себергә юлланды. Әммә, минеңсә, ғаиләңдән айырылып, ҡайҙалыр ситкә йөрөп эшләү дөрөҫ түгел. Кеше ғаиләһе эргәһендә булырға, ғаиләһе эргәһендә эшләргә һәм лайыҡлы эш хаҡы алырға тейеш. Ләкин хеҙмәткәрҙәремде күҙәтеп йөрөп, "Кешегә эшләгәне өсөн түлә, әммә аҡса бирмә", тигән фекергә килдем. Әле 5 эшсемә айына 13-әр мең һум түләйем. Премия өләшеп игенләтә, бесәнләтә бирәм. Кешегә балыҡ бирһәң, ул уны бер тапҡыр ашап, тамағын туйҙыра ла, артабан тағы тамағын хәстәрләй башлай. Шуға күрә, балыҡ түгел, ҡармаҡ тоттторорға кәрәк - балыҡты үҙе тотоп ашаһын. Шуның кеүек, аҡса бирһәң, ул аҡсаны кәрәкмәгән нәмәгә тотоноп бөтөүе мөмкин. Хеҙмәте өсөн иген йәки башҡа продукция биреү уңышлы тип уйлайым, әйҙә, мал тотһондар. Быйыл, бесәнде сабам, тәрәктәргә уратам, яландан үҙегеҙ барып алығыҙ, тинем. Яйлап ҡына халыҡты эшләргә ҡабат өйрәтергә кәрәк, исмаһам, шул пайҙарына сәселгән бесәнде үҙҙәре эшкәртергә өйрәнһен. Балалары ҡайтып ярҙам итһен. Һәр кем үҙе эшләп бол табырға тейеш.

## Эш тә, аҡса ла ныҡыштарҙы ярата

Эшләһәң, хөкүмәт ярҙам итә, субсидия бирә. Әммә ер эшендә аҡса ергә һеңеп бара. Махсус программа буйынса ашлама, ағыулыҡ алам. Ике яңы "Беларусь" тракторы алдым. Бер тракторға 221 мең субсидия бирелде. Шәхси хужалыҡ йәки фермер хужалығы аҫҡанда иң беренсе кәрәкле техника - ул МТЗ-82. Ә хәҙер уға субсидия 110 меңгә ҡалдырылды. Был дөрөҫ түгел. 15 һыйыры булған хужалыҡ нишләргә тейеш? Субсидия 221 мең күләмендә булһа, ул техниканың өстән бер өлөшөн тәшкил итә һәм ҙур ярҙам була. Әле бына бөтөн киң мәғлүмәт сараларында Ҡырымдың Белогорск районына шефлыҡ итәбеҙ, тип шаулайбыҙ. Ә бит беҙҙә лә ундай районлар бар. Һанай китһәң, барлыҡ районларға ла ярҙам кәрәк. Стәрлетамаҡ районында Ҡоҙаш, Мәксүт, Айыусыла, бынан тыш Федоровка, Григорьевка, Веденевка, Васильевкала фермалар буш. Ярҙам ғына итһендәр, фермаларҙы хәҙер мал менән тултырасаҡбыҙ.

"Россельхозбанк"та техника алырға кредит юллайым, тиһән, ныҡлы характерға эйә булырға тейешһең. Күптәр ныҡышлығы етмәйенсә, ташлап ҡуялар. Мин ғинуарҙан йөрөй башлағайным, майҙа Т-150 тракторы алдым. Ул бер аҙна сәсеүҙә эшләп ҡалды. Техниканы кредитҡа алыуҙы хуплайым. 2 миллион 730 мең һум торған тракторҙың 15 процентын, страховкаларын шунда уҡ түләйһең дә, техниканы алып ҡайтаһың һәм иҫәпкә ҡуяһың. Дөйөм суммаһан 730 мең һумы кире ҡайтарыла, әммә ҡулға бирелмәй, шунда уҡ түләү иҫәбенә күсерелә. Тәүге йылда тик процентттарҙы ғына ҡаплайһың. Ҡалған сумманы дүрт йылға бүләләр. Комбайн һатып алһаң да шулай уҡ 15 процентын шунда уҡ түләйһең дә, 50 процент хаҡын субсидия ҡайтара. МТЗ-82 әлеге ваҡытта 700 мең һум тора. Тәүге түләүҙе индергәс, 110 мең һумы субсидия итеп ҡайтарыла. 530 мең һумын 2-5-се йылдарҙа тигеҙ итеп дүрт кварталға бүләһең. Йылына 130 мең һум тура килә. Кварталға 35 мең һум килеп сыға. Теге-был сығымдар менән айына 15-20 мең. Яллап эшләтһәң, шул уҡ аҡса китә. Программа буйынса алһаң, кредит тағы ла уңайлыраҡ. Мәҫәлән, яҙғыһын 129 мең һумға ашлама алдым, 31500 һумын субсидия ҡапланы. Ул махсус исемлеккә ингән барлыҡ техникаға ла ҡағыла.

## "Юҡ"тың башы ауыртмай

Минең өсөн төп ҡанун - "юҡ" тигән һүҙҙең булмауы. Шунан, "белмәйем", "булмай", тигән һүҙҙәр үҙенән-үҙе төшөп ҡала. Тимәк, быны йәки тегене эшләй алмайым, тигән аҡланыу юҡ. Бөтөн нәмәне лә эшләй алам! Икенсенән, бер тапҡыр уңышһыҙлыҡҡа осраның икән, ҡул һелтәп ҡуйырға ярамай. Тәү тапҡыр эш башларға булғас, фермерлыҡҡа ынтылып ҡараным - булманы, икенсе тапҡыр ғаилә малсылыҡ фермаһын ойошторорға уйланым - килеп сыҡманы. Ләкин һәр уңышһыҙлыҡ - ул маҡсатыңа яҡынайыу өсөн бер аҙым. Алдыңа дөрөҫ итеп маҡсат ҡуйырға ғына кәрәк. Аҡсаһы булһа, теләһә кем фермер булып китә ала, аҡсаһыҙ көйө фермер булып ҡара һин. Бында иң ҡулайлыһы - шәхси ярҙамсы хужалыҡ. Уларҙы яйлап ҙурайтып, фермерлыҡҡа күсергә мөмкин. Ә әлеге ваҡытта бары тик шәхси хужалыҡ менән шөғөлләнергә кәрәк.

Миллионерҙарҙың уңыш тарихын ҡараһаҡ, улар бер көндә түгел, быуаттар буйы байығандар, быуын-быуынға байлыҡтарын арттырғандар. Ниндәйҙер һөҙөмтә ала башлау өсөн биш йыл ваҡыт кәрәк. Миллионерҙар тигәс тә, уларҙың янған саҡтары күп булған. Минең дә шундай мәлдәрем булды, барыбер һынманым. Аллаһы Тәғәләнән түҙемлек һораным. Беҙең халыҡҡа, тәү сиратта, түҙемлек етмәй.

Әлеге ваҡытта башыңды эшләтергә, һәр өлкәлә лә үҙеңдән саҡ ҡына алдымыраҡ кешене өлгө итеп, унан күреп, уға ярҙамлашып, тәжрибәһен өйрәнергә генә кәрәк. МТС-тар, күрше-тирә фермерҙар менән бергә эшләргә мөмкин. Әммә көнкүрештәге көнсөллөк сиренән арыныу зарур. Тағы шуны әйтер инем: хәҙер ниндәй генә



*Минең өсөн төп ҡанун - "юҡ" тигән һүҙҙең булмауы. Шунан, "белмәйем", "булмай", тигән һүҙҙәр үҙенән-үҙе төшөп ҡала. Тимәк, быны йәки тегене эшләй алмайым, тигән аҡланыу юҡ. Бөтөн нәмәне лә эшләй алам! Икенсенән, бер тапҡыр уңышһыҙлыҡҡа осраның икән, ҡул һелтәп ҡуйырға ярамай. Тәү тапҡыр эш башларға булғас, фермерлыҡҡа ынтылып ҡараным - булманы, икенсе тапҡыр ғаилә малсылыҡ фермаһын ойошторорға уйланым - килеп сыҡманы. Ләкин һәр уңышһыҙлыҡ - ул маҡсатыңа яҡынайыу өсөн бер аҙым. Алдыңа дөрөҫ итеп маҡсат ҡуйырға ғына кәрәк. Аҡсаһы булһа, теләһә кем фермер булып китә ала, аҡсаһыҙ көйө фермер булып ҡара һин.*

✓ ***Эшҡыуарһың икән, эш артынан ҡыуаһың да ҡыуаһың, көн дә юҡ, төн дә юҡ. Ауыл хужалығы бигерәк тә ныҡ ауыр тармаҡ. Бында дәүләт ярҙамынан башҡа эшләү мөмкин түгел. Шуға ла сит илдә ауыл хужалығына ҙур ярҙам күрһәтәләр.***

# ЕҪЕ ЮҠ... тәме бар

конкурстар уҙғармайҙар. Шәхси ярҙамсы хужалыҡтар араһында ла конкурс ойоштороға, өлгөләрененең тәжрибәһен таратырға кәрәк.

Йәштәр бөгөн ниңәлер агроном һөнәрен һайламай. Агроном юҡ икән - киләсәк юҡ, ергә хужа юҡ. Борон меценаттар ауылдарҙан һәләтле балаларҙы йыйып, үҙҙәре түләп уҡытҡан. Нишләп әлеге ваҡытта хужалыҡтар ерҙе яратҡан балаларҙы һайлап, уларҙы уҡытып, үҙҙәренә кире ҡайтармай? Ер - ул беҙҙең тормош нигеҙе. Икмәк ерҙә үҫә, ағас ерҙә үҫә, һыу - ерҙә. Ҡаҙылма байлыҡтар ҙа ерҙә ята, ергә баҫып йөрөйбөҙ. Ерҙән килгәс, беҙ ерҙә эшләргә тейешбеҙ.

## Күләмдең сифатҡа әйләнеүе

Фермерлыҡты аҙ һан менән башларға ярамай, унан файҙа юҡ. Игенселеккә тотонаһың икән, бер нисә кеше берләшеп, кәм тигәндә 500 гектар ерең булырға тейеш. Мал тотаһың икән, 3 баш менән алға бара алмайһың, 15-те тоторға кәрәк. Унда инде фуражын да алаһың, һатаһың да. Шунда ғына эш алға китә. Хәҙер етештергән продукцияға хаҡты ҙур хужалыҡтар билдәләй. Мәҫәлән, Шишмә май һығыу заводы ҙур күләмдә май сығара. Бәләкәй фермер хужалыҡтарына йыйылышып, тауарын бер партия менән тапшырырға кәрәк. Күләм күп булһа, хаҡ 50 тингә булһа ла күтәрелә. Колхоз-совхоздар бөтһә лә, фермерҙар ҙур бер кооперацияға берләшергә тейеш.

Әлеге ваҡытта минең ерҙәр ете яланды биләй, улар барыһы ла дөйөм өлөш милке. Әлбиттә, теләгән кеше үҙенең пайын айырып алырға мөмкин. Әммә бәләкәй генә ерҙән файҙа ала алмайһың. Шуға күрә, дөйөм өлөш милкен тотошлайы менән ҡуртымға бирергә кәрәк: ауыл фермерынамы, колхозғамы - үҙегеҙ хәл итәһегеҙ. Әммә шарттарын закон менән нығытыу зарур. Бының өсөн йыйылыш йыйып, ҡуртым килешеүен төҙөп, һәр бер пунктын уҡып ҡул ҡуйырға кәрәк. Һорауҙар булһа, миңә шылтыратып, консультация алырға мөмкин (телефон номерҙары редакцияла), сөнки ер эшендә берәү ҙә ярҙам да итмәйәсәк, аңлатма ясаҡ та. Ә мин, ауыл кешеһе ерен юғалтмаһын, тип теләйем. Әммә бер ерҙә бер генә хужа булырға һәм ул үҙенә яуаплылыҡ алырға тейеш. Ерҙе яратҡан кеше эш башлаһа, уның майҙанды арттырыу теләге лә тыуасаҡ. Мин әҙҙән башлағайным, әле ерҙе мең гектарға еткерҙем, хәҙер уңыш алыу өсөн эшләргә тейешмен. Уңышты күтәреү өсөн ашлама, орлоҡ, яңы технологиялар кәрәк.

## Ауыл йәшәйәсәк!

Әлеге ваҡытта ҡаланан пенсионерҙар ауылға йәшәргә ҡайта. Был ауылды һаҡлап ҡалыуҙың иң ҡулайлы варианттылыр ул. Ауылда ололар йәшәгәндә, ул ҡоромаясаҡ. Бынан тыш, механизаторҙың, игенсенең абруйын күтәреү өсөн ниндәйҙер федераль программа кәрәк. Ауылда бәләкәй генә мәғлүмәт үҙәге, унда компьютер булырға тейеш. Яңылыҡтарҙы, ниндәй программалар барлығын халыҡ белеп торһон. Юҡһа, хәҙер гәзит тә алдырмайҙар. Ғөмүмән, һәр районның Агросәнәғәт комплексын үҫтереү бүлегендә Мәғлүмәт-консультация үҙәктәре бар. Мәғлүмәт таратыу, гәзиттәрҙә мәғлүмәт баҫтырыу уларҙың эше.

Ауыл халҡы мал, ҡош-ҡорт тотоуҙы кәметте. Ниңә интегеп үҫтерергә, магазиндан һатам да алам, тип уйлай ул. Ә магазинға ҡайҙан килгәнен, унда нисә йыл ятҡанын берәү ҙә белмәй. Ауылдағы яратып тотҡан малдың продукцияһын магазин кәштәһендә ятҡан аҙыҡ-түлек алмаштыра алмай. Мәскәүҙә йәшәгән таныштарым, был яҡтарға ҡайтһа, иң тәүҙә баҙарға барып, йылҡы, һыйыр, һарыҡ ите алып, аш бешерәләр. Мәскәүҙә лә ит тулып ята, бешерәһең - итенең дә, һурпаһының таты юҡ, тиҙәр. Был сит илдәрҙән ит, һөт продукцияһын индереүҙе тыйыу дауам итһен ине. Бәлки, халҡыбыҙ ҡабаттан күтәрелеп китер, мал аҫырарға яңынан дәртләнер. Элек бит ауылдарҙа май төшөрөү заводтары, тирмәндәр, икмәкханалар бар ине. Хәҙер уларҙы ҡабаттан асырға ваҡыт етте. Быларҙың барыһын да Хөкүмәт эшләргә тейеш, әммә уға бөгөн ҙур предприятиелар ғына кәрәк. Минең хыялым - тирмән төҙөп ултыртырға. Әлеге ваҡытта буш ҡунаҡхана һәм колхоз ашханаһы бинаһын һатып алдыҡ. Шунда икмәкхана төҙәргә, магазин асырға уй бар. Халыҡ икмәккә килгән ыңғайы, магазиндан башҡа кәрәк-ярағын да аласаҡ. Мәләүездә бер туған һеңлем менән кейәү ҙә эшҡыуар, ауылда мәсет, балалар майҙансығы төҙөттөләр. Улар ҙа икмәкхана асып, ҡомалаҡ йыйып, халыҡтан эремсек алып, бәлештәр бешерә. Ошоларҙы тормошҡа ашырыу өсөн аҡса кәрәк. Ә аҡсаны табыуҙың бер юлы - фермерлыҡ. Артабан тағы ниндәйҙер производство булырға тейеш. Эшҡыуарһың икән, эш артынан ҡыуаһың да ҡыуаһың, көн дә юҡ, төн дә юҡ. Ауыл хужалығы бигерәк тә ныҡ ауыр тармаҡ. Бында дәүләт ярҙамынан башҡа эшләү мөмкин түгел. Шуға ла сит илдә ауыл хужалығына ҙур ярҙам күрһәтәләр.

## Аҡса иҫәп ярата

Үҙ эшеңдә асаһың икән, иҫәп-хисап эшләргә, планлаштыра белергә һәр саҡ һәм айыҡ аҡыл менән эш итергә кәрәк. Мин шуны яҡшы беләм: күләм булғас, ҡоролоҡтан зыян күрмәһен өсөн ужым, көнбағыш һәм ярауай сәсергә тейешмен. Бесән дә булһын. Мәҫәлән, көнбағыш 100 процент уңыш бирә, ул аҡса кредитты ҡаплай. Ужым - сәсеү һәм урып йыйыу сығымдарына китә. Ярауай - ул килем. Фермерҙың эше - яйлап ҡына матди база төҙөү. Ҙур хужалыҡтар нисек эшләй: атаһы рәйес булған, әле улы рәйес. Фермерлыҡта ла шундай күсәгилешлек булырға тейеш. Тағы ла шуныһы бар: хужалыҡтың уңышы етәксегә бәйле. Хужа булған ерҙә генә хужалыҡ алға бара, сөнки улар оҙаҡ йылдар эшләй.

Яңы эш башларға теләүселәргә әҙер юлдар юҡ, әммә баҡсаһы 40 сутый икән, тиҙәк сығарып, картуф ултыртыуҙан башларға мөмкин. Уны баҙына тултырһын да, ҡышын Өфөгә килтереп һатһын. Көҙөн картуфтың хаҡы 10 һум, ҡышын - 25 һум. Картуфты иртә яҙҙан сәсһәң, иртәрәк уңыш алып, тағы ла ҡиммәтерәккә һатып була. Әллә ҡайҙан Мысырҙан алып килгәнсе, үҙебеҙҙең картуфты ашаһын халыҡ. Иң еңел юл ошолор тием. Йәки көҙгөһөн халыҡтан йыйып, мөгәрәпкә һалырға ла, март айында ҡалаға алып килеп һатырға. Иң яҡшыһы - аҙлап һәм яйлап һатыу. Шул ваҡытта килем була. Ә ҙур күләмде бер ашханаға тапшырып, ҡасан аҡса бирерҙәрен көтөп ятырға ярамай. Ул аҡсаның артынан йөрөгәнсе, күберәк сығым китә, ваҡытың әрәм була. Беҙҙең һәр беребеҙ өсөн ваҡыт - ул аҡса. Шунда уҡ баҙарҙа һатып, ҡулына аҡса ингәс, икенсе продукция алып ҡайтып, уны ауылда һатырға йәки картуфҡа алмаштырырға мөмкин. Әзербайжан халҡы ни өсөн картуф һатып аҡса эшләй? Был культура гектарынан 25-30 тонна уңыш бирә. Ашлап, матур итеп эшкәртһәң, тәрбиәләһәң, әлбиттә. 50 сутый сәсеп 15 тонна алдың икән ти. 150 тоннаны 10 һумға һаттың - 150 мең. Ҡыш көнө һатһаң инде - 300 мең.

Кеше аҡсаның тәмен һиҙергә тейеш. Ҡурҡырға, оялырға ярамай. Нимәнән оялырға, аҡсаның еҫе юҡ бит. Иң мөһиме, теләк булырға тейеш.

## Ит ҡасан тәмле?

Ауылда халыҡ, нигеҙҙә, мал иҫәбенә йәшәй. Тик бының хәҙер тағы бер бәләһе килеп сыҡты - Таможня союзы талабы буйынса, малды махсус цехтарҙа ғына һуйырға мөмкин. Был - иң бәкәлгә һуҡҡан мәсьәлә. Башҡорт халҡы ғүмер буйы мал тотоп, уны өмә менән һуйып өйрәнгән. Был беҙҙең быуаттар буйына формалашҡан ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙең бер матур сағылышы ине. Өмәләрҙә, элекке һымаҡ, эскелек юҡ, матур итеп аралашып, һөйләшеп үткәрәбеҙ. Кеше бер-береһенең малын күреп, кемдеке арыҡ, кемдеке көр икәнен сағыштырып, нимә ашатыуы менән ҡыҙыҡһына. Шәхси хужалыҡты үҫтереүгә стимул да ул, ялҡауҙарҙы төрткөсләп ебәрә. Тағы бында шуныһына иғтибар итергә кәрәк: малды салыусының ҡулынан да күп нәмә тора. Был эште теләһә кемгә ҡушмайҙар, ҡулынан ит тәмле булған кешегә генә әйтәләр. Тимәк, был кеше мал салыуҙың серен белә, уны ҡурҡытмай ғына сала. Бысаҡҡа тотонор алдынан доғаһын уҡый, эшен бисмилланан башлай. Ауылда бит ҡасан ит кәрәк, эре малды ла, вағын да, шул ваҡытта тоталар ҙа һуялар. Шунда уҡ йыйылышып, эсәк-ҡарынын йыуалар, шунда уҡ эшкәртәләр. Ә һуйыу цехына малды күпмелер ара алып барырға кәрәк булаcаҡ, мал йонсой, стресс кисерә. Ундай малдың ите тәмһеҙ була. Һуйғандан һуң, ярай, эсәк-ҡарынын бирҙеләр икән, ти, уны алып ҡайтҡансы, ул боҙола башлай, эсәккә тәм инә, ҡышын иһә туңа, туңған эсәкте йыуыуы ауыр. Эсәк-ҡарын йыуыуҙың да үҙенең рәтсираты бар. Уның ҡайһыһындыр шунда уҡ һыҙырырға кәрәк, ҡатһа, һыҙырыуы ауыр.

Махсус һуйыу цехында малыңды кем салғанын да белмәйһең. Был аҙымды, йәнәһе лә, иткә справка һәм башҡа документтарҙы һуйыу цехында уҡ биреү менән аңлатмаҡсы булалар. Ә бит ауылдарҙа ветеринарҙар бар, улар ауыл халҡының малына үҙҙәре прививкалар яһай, мал ауырыймы, юҡмы икәнен белеп тора. Һуйыу цехында иткә анализ үткәргәнсе, күпме көтөргә тура киләсәк, һәм унда кәрәкле ҡағыҙҙарҙы ғәҙел бирәләрме, юҡмы - быныһы ла бик бәхәсле.

Бөгөн ауылда мал тотоп өй һалалар, мал тотоп бала уҡыталар, мал тотоп донъя көтәләр. Хатта 200 баш мал алып ҡараусылар ҙа бар. Ошо закон хаҡында ишеткәс, "Ағай, нишләйбеҙ?" тип, егеттәр миңә килә. Мин, берәй нәмә уйлап сығарырбыҙ, тием. Был, минеңсә, ҙур хужалыҡтарҙың депутаттарҙы үҙ яғына ауҙарып итеп, шәхси хужалыҡҡа аяҡ салыуы. Сөнки баш ҡалаға йәрминкәләргә итте кем алып килә - шәхси хужалыҡтар. Кемдең ите тәмле - шәхси хужалыҡтарҙыҡы. Ә силос ашатылған 500 баш малды һуйһаң, иттәре ҡыҙыл була, тәме юҡ. Баш ҡалала уҙғарылған йәрминкәләр ниндәй иттең тәмлерәк һәм үтемле икәнен күрһәтте. Хәҙер 1000 тонна ит һатыу мөмкинлеген шулай итеп бәләкәй хужалыҡтарҙан эреләре тартып алырға тырыша. Ауылды нисек күтәреү буйынса хатта президент кимәлендә түңәрәк ҡор ойошторолһон ине, мин дә үҙемдең тәҡдимдәремде еткерер инем. Сөнки республикала 40 процент халыҡ ауылда йәшәй. Ауыл бөтһә, белмәйем, нимә булыр?..

***Ауыл халҡы мал, ҡош-ҡорт тотоуҙы кәметте. Ниңә интегеп үҫтерергә, магазиндан һатам да алам, тип уйлай ул. Ә магазинға ҡайҙан килгәнен, унда нисә йыл ятҡанын берәү ҙә белмәй. Ауылдағы яратып тотҡан малдың продукцияһын магазин кәштәһендә ятҡан аҙыҡ-түлек алмаштыра алмай. Мәскәүҙә йәшәгән таныштарым, был яҡтарға ҡайтһа, иң тәүҙә баҙарға барып, йылҡы, һыйыр, һарыҡ ите алып, аш бешерәләр. Мәскәүҙә лә ит тулып ята, бешерәһең - итенең дә, һурпаһының таты юҡ, тиҙәр. Был сит илдәрҙән ит, һөт продукцияһын индереүҙе тыйыу дауам итһен ине. Бәлки, халҡыбыҙ ҡабаттан күтәрелеп китер, мал аҫырарға яңынан дәртләнер. Элек бит ауылдарҙа май төшөрөү заводтары, тирмәндәр, икмәкханалар бар ине. Хәҙер уларҙы ҡабаттан асырға ваҡыт етте.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Беҙҙең халыҡ бигерәк баҙнатһыҙ. Үҙенән-үҙе ҡурҡа, үҙенә яуаплылыҡ алырға ҡурҡа. Юҡҡа ғына, күҙ ҡурҡа - ҡул эшләй, тимәгәндәр бит. Бер нәмәнән дә ҡурҡырға ярамай. Эш башлағанда ла ҡурҡа-ҡурҡа ғына, эшләп ҡарайым әле, тип түгел, үҙеңә ышаныс менән, мин булдырам, тип тотонорға кәрәк", - ти аяғында ергә ныҡлы баҫып торған эшҡыуар, ысын мәғәнәһендә ер хужаһы Ҡасим Ишембаев. Бәлки, уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға кәрәктер?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

✓ ***Ҡояш ҡыҙғылт нурҙарын тирә-яҡҡа мул һирпеп, тотош офоҡто ҡыҙартып байып бара. Һыбайлылар икеһе бер булып - ат өҫтөндә, ә арттан килгән ат алдағыһынан ҡалмай йәнәш атлап, ошо шәфәҡ нурҙарына инеп юғалдылар.***

Мәрйәм БУРАҠАЕВА

# ҠОРҘАШТАР

(Хикәйә)



Миңзаман, Маһыйы менән икәүләшеп көңгөр-ҡаңғыр килеп, кәңәш-төңәш итте лә, айырым йәшәргә тип бура бурай башланы. Бүрәнәләрен ырмауланы, баштарын тигеҙләне. Оло бура түгел. Бишкә-биш итеп кенә өй күтәрергә ниәтләнеп йөрөй. Әйҙә, балалар үҙ алдына йәшәһен, беҙ - үҙебеҙсә, тип уйланылар. Бер ишек алдында. Айырым да, бергә лә түгел. "Өй һалыуҙың нийе бар, мүкләйһе лә сутлайһы", тиһәләр ҙә яңғыҙына бура бурау арыуға ғына һуҙылды. Хәҙер инде күтәрәһе генә ҡалды. Ярҙамға берәйһе булһа, уныһын да "һә" тигәнсе эшләп ҡуйыр ине лә, уландары ла, ауылдаштары ла бесәнгә төшөп бөттө. Бернисә ҡарт-ҡоро ғына ултыра урамда йорт-ҡура һаҡлап. Миңзаман күтәрешергә ҡорҙашы Әхмәтйәмилгә әйтергә булды. Эшкә әүәҫ, салт булғаны өсөн түгел, ҡайғылы сағы уның. Әҙерәк эшкә албырғап, һүҙгә әүрәп, күңел баҫһын, тип уйлауы. "Һыйлым шәп кеше ине. Уны онотоу - ай-һай! Ерләгәнебеҙгә байтаҡ булды, Әхмәтйәмилдең йөҙөнә һаман нур ҡунмай әле", - тип уйлап алды Миңзаман, ҡорҙашын йәлләп.

Йәш сағында гел яҙыу-һыҙыу менән шөғөлләнгән Әхмәтйәмилдең ҡара эшкә ҡулы ла килешмәне, эш мәнеһе лә белмәне. Ишек күгәне нығыттырырға ла Миңзаманға килә торғайны. Ә үҙ эшендә уны алмаштырырлыҡ кеше булмағандыр. Иҫәп-хисапҡа хайран шәп ине. Миңзаман уның ҡул аҫтында урман ҡырҡыуҙа эшләне. Тик Әхмәтйәмилде үҙ тыуған яғында оҙаҡ тотманылар - шул уҡ урман эшенә, Ҡариҙел яғына күсерҙеләр. Коммунист кеше ни, партия ҡушҡас, ни эшләһен - йорт-ерен ҡалдырып, күңеле тартмаһа ла, ете ят ерҙәргә ғаиләһен алып китте. Яңыраҡ, хаҡлы ялға сыҡҡас, ҡайтҡайнылар ҙа бит, еңгә әллә ни эшләп ҡапыл ғына донъя ҡуйҙы. Ауылдаштары өсөн ҡапыл тойолһа ла, Әхмәтйәмилдең әйтеүенә ҡарағанда, унда һаулыҡҡа мандымаған, тыуған яҡтарынан айырылыуҙы ауыр кисергән, Инйәр буйҙарын һағынған, ти. Ни эшләйһең инде - үлем сәбәпһеҙ булмай. Бер кем дә мәңгелек түгел. Тик Әхмәтйәмилгә ауыр. Был йәштә ир кешегә яңғыҙ ҡалыу - ай-һай... Хәҙер кем холҡона ярайһың да, кем генә һине үҙ итһен...

Ярар, ярҙамға саҡырайым, бүрәнәнең бер яғынан тотоп күтәрешер. Ҡайғы япраҡтары ҡойола башлағансы албырғатыр нәмә кәрәк кешегә. Унан һуң... Әхмәтйәмилде ярҙамға саҡырыуының тағы бер ғилләһе бар: кисә мүк йыйырға тауға барған саҡта бер нәмә келт итеп кенә иҫенә килеп төштө. Йәш ҡарама ҡайырынан ҡулайлап алған артмағына мүген тәҫләп һалды ла, ваҡыт самалайым тип, ҡояш байышына ҡарағайны... Ҡояш ҡып-ҡыҙыл булып тау артына байып бара. Тотош офоҡто иңләп шәфәҡ нуры ҡыйылған... Ошо күренеш Миңзамандың күңелен ҡапыл иләҫләндереп ебәрҙе. Бынан ҡырҡ йылдар самаһы элек булған хәл бөгөнгөләй күҙ алдына килде лә баҫты. Хәтер тигәнең ҡыҙыҡ та инде. Әйтерһең, ул ҡырҡ йыл арауығы бөтөнләй булмаған.

...Әхмәтйәмилдең начальник булып эшләгән йылы. Ажғырып торған күк саптарына кашауай егеп кенә килеп етә торғайны урмансылар янына... Урман ҡырҡыусылар яратты үҙен. Яҡын-тирәләге төрлө ауылдарҙан һыбай килеп ялланып эшләүсе, ҡырҡ ата балаһы тигәндәй, кешеләрҙе туплап алыуы еңел булмағандыр уға. Шуларҙы һәүетемсә тыныс ҡына эшләтә ине Әхмәтйәмил. Йомшаҡ телле булды. Ауылдашы булғанғамы, ни эшләптер, Миңзаманды яҡын итте. Бер ваҡытта ла үтенесен кире ҡаҡманы. Ярҙам иткеләп торҙо. Көн һораһа, ялын бирҙе, иртәрәк ҡайтайым тиһә, ебәрҙе. Ул заманда табырһың ундай түрәләрҙе...

Миңзаман шәфәҡ ҡыҙыллығына оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Бына-бына алһыу нурҙар эсенә инеп юғалған ғашиҡтар килеп сығыр ҙа, береһе бер яҡҡа, икенсеһе икенсе яҡҡа айырылышыр. Ә менгеләре артҡа ҡайырылып кешнәшерҙәр. Кешнәү тауышы тауҙарға, урмандарға ҡаҡлығып, шаңдау булып тирә-яҡҡа таралыр...

Бер көн аҙна аҙағында иртәрәк килде лә Әхмәтйәмил, эшселәрҙе ҡайтарып ебәрҙе. Миңзаманға:

- Ҡорҙаш, һин саманан артығыраҡ ҡалдырылған ағас төптәрен сапҡылап, әрҙәнә тирәләрен таҙартып сыҡ инде. Өҫтәмә түләрмен. Мин оҙаҡламам, килгәс, ауылға бергәләшеп ҡайтырбыҙ, - тип, йомош ҡушты һәм, атын туғарып, кашауайын йәшел япраҡтар менән ҡаплаштырҙы ла саптарын юрттырып китеп барҙы. Миңзаман бер юлы ҡулы тейгәндә әллә ҡасандан бирле тынғы бирмәгән ҡарағайҙы ҡарап төшәйем әле, солоҡ ҡорттар эйәләшкән, ахыры, тип, кирәмен кейеп күтәрелгәйне, күҙенә Әхмәтйәмил салынды. Елдерә генә саптарында. Уға ҡаршы икенсе һыбайлы килә. Уныһы - ҡатын кеше. Әхмәтйәмил сабып барған ерҙә ат өҫтөнән тегене эләктереп алып, үҙ атына ултыртты. "Ҡарале, сибек кенә тойолһа ла, көс тә, оһол да бар икән ирендә! Ай-һай!" тип һоҡланып ҡарап торҙо Миңзаман. Һыбайлыһыҙ ҡалған менге Әхмәтйәмилдең айғырының янбашына башын һалып иркәләнгәндәй итте. Айғыр боролоп ҡараны ла аҙымдарын йәһәтләтте, бейә уның янбашынан башын алмай эйәрҙе. Ҡояш хәс әлеге һымаҡ ҡыҙғылт нурҙарын тирә-яҡҡа мул һирпеп, тотош офоҡто ҡыҙартып байып бара. Һыбайлылар икеһе бер булып - ат өҫтөндә, ә арттан килгән ат алдағыһынан ҡалмай йәнәш атлап, ошо шәфәҡ нурҙарына инеп юғалдылар. Хужаларының бер-береһенә йән атып атлығып тороуын менгеләре лә тойғандыр. Уларҙың тойғо ҡайнарлығы менгеләренә лә күскәндер, күрәһең.

"Кем икән был?" тип уйланы Миңзаман. Ә бер саҡ йомаҡ сиселде. Тағы ошондай уҡ осрашыуға киткәйне Әхмәтйәмил, күп тә үтмәй, кире йүгереп килде.

- Миңзаман ҡорҙаш, аттар әллә ҡайҙа киткән, - ти.

- Хәҙер, - тине лә Миңзаман үҙ менгеһенә атланып, юғалған аттарҙы эҙләргә китте. Миңзаман ҡорҙашының тәүге осрашыу урынын үҙгәрткәнен белә ине. Шул аҡланға юл алды. Яңылышманы. Аттар һәүетемсә генә шунда утлап йөрөй ине. Икенсеһе ҡола бейә булып сыҡты. Бынан ун-ун ике саҡырым алыҫлыҡтағы ауылда йәшәгән балдыҙ тейешле кешеһенеке ине бейә.

Әхмәтйәмил күсеп киткәндән һуң да, шәфәҡтәй йылылыҡ һирпеп торор һөйөү ялҡыны һымаҡ күңеленә уйылды ла ҡалды Миңзамандың. Хатта Маһыйына булған тойғоларын да шәфәҡ ҡыҙыллығы кеүек күҙ алдына килтерҙе. "Ир менән ҡатын араһындағы һөйөү ниндәй була?" - тип һорашалар: "Ихлас булһа, шәфәҡ төҫөндә", - тип яуап бирер ине ул.

Үҙ ғүмере эсендә нисә тапҡыр шәфәҡ күҙәтте Миңзаман. Күҙәткән һайын, ҡыҙғылт нурҙар ҡосағына бер бөтөн булып инеп киткән һындарҙы күҙ алдына килтереп, йыуаныс алды. Ошоларҙы иҫкә төшөрөп һөйләшеп алыу теләге лә бар ине Миңзамандың.

- Әхмәтйәмил ҡорҙаш, һин бөгөн миңә аҙыраҡ ярҙамлашып ебәрәһеңме әллә? - тип, йомошон әйткәс, Әхмәтйәмил бергилке өндәшмәй торҙо. Ҡайғы баҫҡан йөҙөнә аҙ ғына йылмайыу ишараты сығарҙы ла:

- Ҡасау тотоп, ағас сөй урыны тишмәгән ҡулым менән бура бурай аламмы һуң мин? Ул яҡҡа таһыллыҡ юҡ бит минең, ҡорҙаш, - тине.

- Уныһын беләм.

- Әләйһәң?

- Төп эшен тамамлағанмын мин. Бүрәнәнең икенсе башын күтәрешһәң, еткән. Мүк һалышырһың, - тине Миңзаман.

- Ысынлап та, файҙам тейерлек булһа, ихлас ризамын. Көн үткәрә алмай ыҙалап йөрөгәнсе, ҡайҙа ла һуң... Тик ат дағалағанда ҡойроҡ тотоп торған һымаҡ булмаһа...

- Юҡ, юҡ, ҡорҙаш. Яңғыҙым булдыра алмайым. Бәләкәй генә булһа ла бура бит. Йәш сағым булһа, ул бүрәнәләрҙе орсоҡ шайы ла күрмәҫ инем дә... Бүрәнәләре лә уҫаҡ ҡына ла бит.

- Уҫаҡтан ниндәй генә бура була һуң ул?

- Һыу теймәй, бер бешегеп алһа, уҫаҡтан да нығыраҡ ағас булмай ул. Тәңгә лә йылы.

- Һәр нәмәнең үҙ рәте бар шул. Һинең тәжрибә ҙур. Ырмауын ырмауға, еген еккә килтереп эшләйһең.

Шулайтып, Әхмәтйәмил ғүмерендә беренсе тапҡыр тигәндәй бүрәнә күтәреп, бура өҫтөнә атланып ултырып, бергәләште ҡорҙашына. Көндәр буйы әңгәмә ҡорҙолар, үткән ғүмерҙәрен иҫләнеләр, көлгән урынында көлөп, аптырар урында аптырап, йәшлектәренә ҡайттылар.

- Мин рәхмәтлемен ул һиңә, Әхмәтйәмил ҡорҙаш. Ғаиләм ишле булды, Маһыйғынам яңғыҙ донъя көттө. Шул саҡтарҙа эштән бушатып ҡайтарып ебәргән саҡтарың да, кашауайыңды биреп торғаның да, өҫтәп аҡса түләгән мәлдәрең дә булды, - тине Миңзаман.

- Һин үҙең эшкә әрһеҙ булдың бит, Миңзаман ҡорҙаш. Башҡалар бер һелтәгәндә, ике һелтәнең. Тейһә - ҡорға, теймәһә - ботаҡҡа, тип һупалап эшләмәнең. Уны бит мин күрә инем... Унан һуң, һине яҡын итеүемдең тағы бер ғилләһе бар ине, - тип, кеткелдәп кенә көлөп алды ла, көрһөнөп ҡуйҙы Әхмәтйәмил. - Зәйтүнгөләм алдындағы гонаһымды һин генә белдең. Шуны асманың бит. Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр, тиһәләр, һинекенә арбаһы-нийе менән һыя ине. Рәхмәт. Зәйтүнгөләм белеп ҡалһа, бик рәнйер ине.

- Ай-һай яратыштығыҙ бит Гөлбаҙыян балдыҙ менән. Ундай һөйөүҙе ғәйбәткә әйләндереү үҙе гонаһ булыр ине, - тине лә: "Сәскәнән бал ҡорттары бал йыя, йылан ағыу табып һура", ти торғайны өләсәйем", - тип өҫтәмәксе булғайны, өндәшмәне. Шулай ҙа ни эшләптер ошо һүҙҙәр тел осона килде.

- Бигерәк сая булды шул Гөлбаҙыян да. Нисәмә тау артылып, ярһып килеп етә торғайны яныма.

- Сая ҡатындар шулай ярһып яраталыр ҙа инде ул, ҡорҙаш, - тине Миңзаман. "Гөлбаҙыян" тигән исемде телгә алыу менән, Әхмәтйәмилдең йөҙөндә лә нур балҡып ҡуйҙы. Миңзаман һирпелә һалып ҡына уға күҙ ташлап алды ла, "Ундай яратышыу ғүмергә лә онотолмайҙыр ул", тип уйланы, эстән генә йыуанып.

- Гөлбаҙыянды иҫкә төшөрөп, күңелде иләҫләндереп ебәрҙең, - тине Әхмәтйәмил, бер аҙ шымып ҡалғандан һуң.

- Әйткәндәй, ни эшләп Гөлбаҙыянды алып ҡайтып, арыу ғына итеп донъя көтмәйһең? Бағыулы, тәрбиәле лә булыр инең, - тип, һүҙҙе ялғай һалып алды Миңзаман, "Ҡалай йәтеш кенә килеп сыҡты әле һөйләшеү", тип ҡыуанып.

- Ни тиһәң дә, күңелдә төйөр йөрөй шул минең, Миңзаман. Сая, үткер, әрһеҙ ҡатындар һөйәркә булыу өсөн генә ҡулай бит ул. Ә донъя көтөү өсөн Зәйтүнгөл, һинең Маһинурың һымаҡ баҫалҡы, сабыр бисәләр һәйбәт. Ир, бала, ғаилә тип йән атып торғандары. Ҡуйынында ваҡытта икенсе кеше тураһында хыялланып ятҡан бисәләр менән нисек донъя көтмәк кәрәк? Ғаиләне бер бөтөн итеп тотоп тороу бисәләр иңендә. Шул төп йөк тартыусың сығынлап, тирә-яҡҡа сарпаңлай башлаһын әле! Шуға мин ир өҫтөнән икенсе кеше менән йөрөгән бисәләрҙе һөйһөнөп етмәйем. Былай мин Гөлбаҙыянға рәхмәтлемен. Бер яҡтан, унан башҡаға күңел һала алманым. Икенсенән, ул мине ғаиләмә ҡайтарҙы. Зәйтүнгөләмдөң ҡәҙерен арттырҙы.

Был хәбәр Миңзаманды шаңҡытты ла ҡуйҙы.

- Һуң һин йән атып ятраҡан Гөлбаҙыяныңдың ниндәй хәлдә икәнлеген дә белмәй инеңме ни? Ағас баҫып үлтергәйне бит уның ирен. Ул бит имгәнеп ҡалған апаһы менән еҙнәһен бaҡты. Балалар ҙа апаһыныҡы ине. Йәштән генә тол ҡалды бит ул...

- Гөлбаҙыянмы? - Әхмәтйәмил күтәргән бүрәнәһен төшөрөп ебәрҙе. - Гөлбаҙыян ирһеҙ инеме ни ул? - тип ҡабатлап һораны ла кеҫәләрен һәрмәштерә башланы. Тартыуҙы күптән ташланым мин, был йәштә оят бит, тигәйне. Ғәҙәте буйынса эҙләйҙер инде, тип уйланы Миңзаман. Тағы ла нығыраҡ бөршәйеп киткән ҡорҙашын йәлләп ҡуйҙы.

- Әйҙә, ҡорҙаш, бер һыуһын эшләнек. Маһыйҙың самауыры ҡайнаған, ҡоймағы майланған. Бил яҙып алайыҡ, - тине. Үҙе ҡулйыуғыс янына килде. Әхмәтйәмил дә ҡул йыуырға тотонғайны, усына алған һыуы тирә-яҡҡа сәсрәп тик торҙо. Миңзаман уның былай ҡалтыранғанын күргәне юҡ ине.

Аҫау айғыр һымаҡ йөрөгән ирҙәрҙе лә, тамағы бесәнгә туймай ҡапҡанан-ҡапҡаға элмәнләп йөрөгән һыйыр һымаҡ, әрһеҙ бисәләрҙе лә яратманы Миңзаман да. "Ни эшләп гонаһҡа баталар икән? Бер түгел ике ғаиләгә хыянат. Ке-

***✓ Бәйелһеҙ нәфсе сарсатмағандыр Гөлбаҙыянды. Ҡайғылы-хәсрәтле ғүмерендә күңелен йылытҡан, яраларына шифа булған матур тойғо булғандыр, тип уйлап, икеһен дә аҡлай ҙа ҡуя Миңзамандың күңеле.***

шенең рәнйешен алып... Рәнйеш кешенең үҙенә ҡайтҡанын аңламайҙармы икән?" - тип аптырар ине ҡалала йәшәгән бажаһына. Бажаһы ни, асыҡтан-асыҡ йөрөнө лә ҡуйҙы ҡатыны өҫтөнән. Лифт төймәһенә баҫыуҙан башҡа эш булмағас, бер ҙә бирешмәгәйне шул. Алтмыш йәшендә лә ут сәсеп, йәш тай һымаҡ уйнаҡлап торҙо. Ә ҡатыны, Миңзамандың балдыҙы, ул ҡәйнәһен ҡараны, ул балаларын баҡты. "Донъя ҡәҙерен белеп ҡалырға кәрәк, бажай. Минең ярты йәшемде генә йәшәгән бисәләр үҙҙәре килеп аҫылына муйынға. Нисек түҙеп тормаҡ кәрәк", - тип ебәргән булыр ине. Ана, ята хәҙер уҫлаптай башы менән ҡатыны күҙенә ҡарап, тилмереп, имгәк булып. Әҙәм яфалап. Бөйөрөнән түҙмәй. Самаһыҙлыҡтың да самаһы бар шул. Ә минән йәшерәк. Әйтерһең, ғүмер бөгөнгө көн генә. Бер ҙә һөйәркәләре баҡмай бит - бисәһе ҡарай. Тегеләре... Әйтер инем инде, тел бысраҡты килмәй, бар тип тә белмәйҙәрҙер әле...

Ә Әхмәтйәмилде ғәйепләмәне Миңзаман. Ни эшләп икәнен үҙе лә аңлап етмәй. Тик бажаһы менән сағыштыра башлаһа, өләсәһенең теге һүҙҙәре иҫенә килә лә төшә. Әллә балдыҙын ныҡ йәлләүҙән микән? Әхмәтйәмилде яратыуы арҡаһында анау тиклем ҡайғыларын еңгәндер Гөлбаҙыян балдыҙы. Ҡайғылары ерҙән күктәргә ашырлыҡ булды: апаһы, еҙнәһе, ире менән дүртәүләшеп урман ҡырҡҡан саҡта, төшкөлөктә ашап ултырғанда, өҫтәренә ағас килеп ауған. Кистән быса башлаған ағас икенсеһенә һағып ауҙарылмай ҡалған да иртәгеһен быларҙы баҫҡан да ҡуйған. Ире шунда уҡ йән биргән. Апаһы менән еҙнәһе ғүмерлеккә зәғифләнеп ҡалды. Өҫтәүенә, апаһының ике балаһы. Тәрбиәләй торғас, апаһын аяҡҡа баҫтырған да, уныһы барыбер үҙ аллы донъя көтә алманы. Бергә йәшәнеләр. Еҙнәһен дауалатырға үҙе йөрөттө Гөлбаҙыян. Егермеһе лә тулмағайны ул саҡта...

Гөлбаҙыяндың һөйөүен ҡырау һуҡҡандан һуң тағы ҡалҡып сыҡҡан сәскәләргә оҡшатты Миңзаман. Кешегә йәшәп китеү өсөн көс күп кәрәк шул. Ошондай көндәрен нурландырыу өсөн Тәңре ебәргәндер был һөйөүҙе. Әхмәтйәмилде осратҡас, ғашиҡ була ла ҡуя. Ҡалалағы бажаһы һымаҡ арбап торған ҡарашлы, мыҡты буй-һынлы бер кеше булһа, ҡайҙа ла һуң? Сибек кенә, күрер күҙгә күркәмһеҙ генә Әхмәтйәмилгә ни тип мөкиббән киткәндер? Хоҙай үҙе генә белә. Күңеле иңрәп, наҙға сарсап йөрөгән саҡтары булғандыр. Бәйелһеҙ нәфсе сарсатмағандыр Гөлбаҙыянды. Ҡайғылы-хәсрәтле ғүмерендә күңелен йылытҡан, яраларына шифа булған матур тойғо булғандыр, тип уйлап, икеһен дә аҡлай ҙа ҡуя Миңзамандың күңеле.

- Теге минең кашауайымды алып, дауаханаға илтешеп ҡуйғаның уның ире түгел инеме ни? - тип һораны Әхмәтйәмил, өндәшмәй генә сәй эсеп, бер аҙ тынысланып, асылып киткәндән һуң.

- Юҡ. Еҙнәһе ине. Хәҙер апаһы ла, еҙнәһе лә гүр эйәһе булдылар инде. Балалар ҙа үҫеп китеп бөттө. Баҙыянға ҡайтып йөрөйҙәр яҡын итеп.

- Уны ни эшләп элек үк әйтмәнең?

- Беләһеңдер тип уйлағайным.

- Беләһеңдер, тип уйлағайным... Ә мин уның хәлен белергә тейеш инемме ни, ҡорҙаш? - тине Әхмәтйәмил, тәрәндән сыҡҡан әсенеү менән. - Минең уға булған тойғоларым көндәлек тормоштан юғары ине. Ул бит менгеһендә ярһып сабып килә лә бөтөн йөҙөн балҡытып йылмайып ебәрә ине... Бөтә булмышы менән йылмая ине. Електәргә тиклем үтә ине был йылмайыуҙың йылылығы. Минең ғаиләм барын да белде, өйләнеремә лә ымһынманы... Ул яратты ғына. Уның бындай минуттарында донъяуи хәлдәр тураһында һорашыу хилаф булыр ине кеүек, һорашманым. Ышанаһыңмы, юҡмы, ҡорҙаш, бәлки, был йәштә уңайһыҙыраҡтыр ҙа... Шулай ҙа бер нәмә һөйләйем. Бәләкәй сағымда малайҙар менән күбәләк торорға сыҡтыҡ. Малайҙар оһолло. Тиҙ генә тоталар ҙа китап араһына һалалар. Мин дә сәмләнәм сәмләнеүен, тота алмайым. Бер саҡ эләктерҙем бит. Усыма һалдым, һыңар ҡанатының осонан ғына тоттом да ҡарап торам. Ҡанаттары шул тиклем матур. Ниндәй генә биҙәк, ниндәй генә төҫ юҡ! Бәләкәй саҡта тәү мәртәбә йәйғор күргәндә хайран булғайным гүзәллеккә. Әле лә шулай. Күбәләкте ебәрҙем, китап араһына һалырға ҡулым барманы, ҡыймаһым. Ошо матурлыҡ әле лә күҙ алдымда. Күңелгә һеңгән. Гөлбаҙыянға булған тойғоларым да шулай ине. Тик әле яңыраҡ хәтергә алдым да... һин кашауайымды алып тороп, дауаханаға тейәп алып барған ир кеше күҙ алдыма килде... Тәнем сымбырлап китте. Ә ул еҙнәһе булған икән... Ҡалай ҙур гонаһ алғанмын уның тураһында хилаф уйлап... Ни эшләйбеҙ, Миңзаман, бураны тамамлағас та барып урайыҡмы әллә ауылына?

- Мин ни, бик ихлас ризамын. Хәҙер ул яҡҡа бынамын тигән юл һалдылар. Оҙон арба егә лә елдерәбеҙ. Гөлбаҙыянды яусыларға кейәү егете булып барырға бик ризамын. Маһыйҙы ла алабыҙ.

* * *

Гөлбаҙыянды бөтөн ауыл оҙатып ҡалды, һөйкөмлө, алсаҡ, һәр ваҡыт көләс йөҙлө, ярҙамсыл булғанға ауылдың бер йәме кеүек күрә торғайнылар уны. Шуға ла икенсе тарафтарға китеүенә өлкәнерәктәр бошоноп ҡалды. Уның ҡарауы, балаларға байрам булды был көн. Әхмәтйәмил уларға мул итеп кәнфиттәр, аҡсалар һипте. Шуҡ малайҙар арҡаһында ҡыҙҙарға өлөш сыҡмаҫын иҫәпкә алып, матур-матур таҫмалар ырғытты. Малайҙар, таҫмаларҙы ҡыҙыҡайҙар алһын, тип, һемәйҙеләр. Таҫмаларға тәмле кәнфиттәр төрөлгәйне.

Гөлбаҙыян арбаның артына - һыйырын, тәртәгә бынан ҡырҡ йыл элек бейәһе ҡолонлап биргән һәйбәт тоҡом күк саптарҙан ҡала килгән тайын бәйләне. Арбаға нығытып ултыртылған оло һандыҡты тотош ҡаплатып, йөндән һуғылған балаҫ йәйҙеләр. Түшәк-ҡаралты һалдылар. Әхмәтйәмил менән Гөлбаҙыянды ҡушлатып ултыртып, Маһый менән Миңзаман алданыраҡ урын алды.

Ауылды сығыу менән, Миңзаман:

- Әйҙәгеҙ, малҡайҙар! Бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта! - тип, аттарға сыбыртҡы осо күрһәтмәксе ине, Маһыйы, сабыр ғына йылмайып:

- Ҡайҙа ҡабаланаһың ул хәтлем? Бер ҡартая белмәй ошо, дилбегә ҡулына эләкһә, дәртләнә лә китә, һыйыр ат ыңғайына сабып барһынмы! - тип, ҡартыҡайының терһәгенән тотто.

- Ай-һай, һыйырҙы иҫтән сығарып ташланылған бит! Ярай, ғүмер - ул иҫтә ҡалған мәлдәр, тигән бер аҡыллыһы. Дөрөҫ әйтәһең, Маһый. Бөгөнгө көндө үткәрергә ашыҡмайыҡ әле. Иҫтә ҡалырлыҡ булһын, шулай бит, Әхмәтйәмил ҡорҙаш, - тине, артына ҡайырылып ҡарап. Яуап биреүсе булманы. Сөкөрлөгө сығып, ниҙер һөйләп барған Гөлбаҙыянды онотолоп китеп тыңлай ине Әхмәтйәмил.

Аттар, дилбегәнең бушағанын тойоп, үҙ яйына йылдам ғына атланы. Миңзаман арбаға ҡырыныраҡ төшөп ятты ла күңелле бер көй һуҙып ебәрҙе. Бер аҙҙан шәфәҡ нурҙарына сумған ауылдары ла күренде.

*БАЛАҢА УҠЫ!*

## ҠУНАҠ

Баҡсала уйнап йөрөгән ваҡытында Хәмди юл буйлап китеп барған сал сәсле ҡартты күреп ҡала. Матур бер йорттоң ҡапҡаһына килеп еткәс, ул ял итергә ултыра.

- Малай! - тип ҡарт Хәмдигә өндәшә. - Бер төнгә генә ошо ҡунаҡһарайҙа ҡала аламмы мин?

- Был ҡунаҡһарай түгел дә ул, - тип көлөп ебәрә Хәмди.

- Нимә һуң был?

- Был беҙҙең өйөбөҙ.

- Әә... Ә кем төҙөгән был өйҙө?

- Минең олатайым.

- Олатайың уны кемгә ҡалдырған?

- Атайыма.

- Атайың кемгә ҡалдырыр?

- Миңәлер...

Ҡарт йылмайып Хәмдигә шулай тигән:

- Йорттоң барлыҡ хужалары ла уны кемгәлер ҡалдыра килгән икән, тимәк һеҙ бөтәгеҙ ҙә был өйҙә ҡунаҡ ҡына, улым.

Яңы уҡыу йылы башланғас, дин мәҙәниәте дәресендә уҡытыусы балаларға йәй көнө булған иң сағыу мәлдәрҙе иҫкә алырға ҡуша. Хәмди үҙенең сал сәсле ҡарт менән булған хәлен һөйләй. Әлбиттә, бөтә балалар ҙа был хәлдең мәғәнәһен, фәлсәфәһен аңламай. Ә уҡытыусы дәресте Бәйғәмбәребеҙ ҡалдырған хәҙис менән тамамлап ҡуя:

*"Мин был донъяла ағас күләгәһендә ял итеп алып, юлын артабан дауам иткән юлсы ғына".*

## ЭТ

Мимеш ағай үҙенең ҡатыны менән яланда эшләгән. Уларҙың бәләкәс кенә улдары Ҡарабаш исемле эт менән бергә ялан ситендәге ағас аҫтында серем итеп ятҡан.

Ата-әсә ағас эргәһенә килгәс ҡурҡыныс күренешкә шаһит булғандар: уларҙың бәләкәс балаһы салҡан ятҡан, ә Ҡарабаш ҡанға буялып, ҡыҙғаныс төҫ менән ултыра.

Мимеш ағайҙың асыуы сигенә еткән. Ҡарабаш сабыйға тейгән тип уйлап, ул эттең башына салғыһы менән һуғып ебәргән. Эт шундуҡ ҡанһырап ергә йығылған.

Сабыйҙарының тыныс йөҙ менән килеп тороуына ата-әсә бигерәк тә аптыраған. Ә баланың эргәһендә ятҡан үлек йыланды күргәс, ата-әсә Ҡарабаштың сабыйҙы ҡотҡарам тип йылан менән алышыуын аңлап ҡалған. Икеһе лә бик бойоҡҡан улар.

Әгәр ҙә Мимеш ағай тәүҙә үк асыуын ҡабартмай, тыныс тотһа икән үҙен! Бәйғәмбәр ҙә бит хәҙисендә шулай тип иҫкәрткән кешеләрҙе:

*"Уйлап эшләнгән эш - Аллаһтан, ашығып эшләнгән - шайтандан."*

*ЗАУЫҠ*



## ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Геүләп илап ҡайтып индем
Бала саҡта туҡмалып,
Яҡлауына өмөт итеп
Әсәйемә уҡталып.
Нимә менән әүрәткәндер -
Ярты сәғәт үтмәне,
Рәхәтләнеп уйнай инек,
Онотоп бар үпкәне.
Беҙгә бер кем дә "ошаҡсы"
Тигән исем таҡманы,
Ошаҡлашып йөрөмәгәс,
Дуҫтарыбыҙ ҡаҡманы.
Ул саҡтарҙа әсәйемдең
Яҡлауын теләй инем:
Әсәйемдән бөтәһенең
Ҡурҡырын белә инем...
...Мин балалар үҫтергәндә
Әсәйемде аңланым,
Уның биргән был һабағын
Күңелемдә һаҡланым:
"Бала-сағa талашыр ҙа,
Хәҙер уйнар ярашып,
Әҙәм көлдөрөп йөрөмә,
Үҙ баланды яҡлашып!"
Әсәйемдең һүҙен тоттом:
Кеше менән боҙолоп,
Бала әрләп йөрөмәнем,
Белер-белмәҫ ҡыҫылып.
Боҙолһа бала ғәҙәте,
Булмай уны төҙәтеп.
...Бер кеше лә көлмәҫ минән,
Бармаҡ менән күрһәтеп.

* * *

Бәләкәйҙән минең телем
Үҙемә дошман булды,
Күпме шул тел арҡаһында
Күҙҙәрем йәшкә тулды!
Башҡа килгән һүҙҙе һөйләп,
Апайҙарҙан әрләндем,
Илай-илай тәүбә итеп,
Әрләнгәнгә ғәрләндем.
Ағайҙарым бик шәп итеп
Төшөндөрҙө төйгөсләп:
"Телеңә хужа булмаһаң,
Ырғытабыҙ өҙгөсләп!"
"Тартай теленән таба," тип,
Әсәйем әрләй ине,
"Телеңде тыйып өйрәнһәң,
Тыныс йәшәрһең", тине.
Ябыҡ булғас, тыртыҡ инде,
Тыртыҡты тартай тиҙәр,
Миңә эләгәлер, тинем,
Үҫеп алғанға ҡәҙәр.
Инде күптән тыртыҡ түгел,
Һаман телемдән табам,
Онотолоп, ысҡындырам,
Һуңынан өрөп ҡабам.
Тура һөйләү - аҡыл түгел,
Һүҙҙәр башты ашайҙар.
Күрәһең, аҙ төйгөсләгән
Бала саҡта ағайҙар!
Тейер-теймәҫ һүҙҙәремдән
Сит кешеләр көлмәһен,
Үҙ ағайың артыҡ төймәй,
Сит ағайҙар төймәһен!
Эй телде тыйып ҡарайым!
Телсә сыҡҡыр, тыйылмай!
Хәҙер балалар өйрәтә:
"Һөйләмәсе уйламай!"
Ағайҙарҙың төйгәндәрен
Һағынып иҫкә алам,
Әсәйем һүҙе ҡолаҡта:
"Тыйсы телеңде, балам!"

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Уң ҡулың биргән саҙаҡаны һул ҡулың белмәҫкә тейеш, тиелә бер хәҙистә. Йәғни, хәйер биреү кешегә күрһәтеү, маҡтаныу өсөн түгел, ә изгелек эшләү хаҡына башҡарыла.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҠАРТАЙЫУҘАН... һаҡлаусы ысул табылған

■ Шоколад бауыр циррозын дауаларға ярҙам итә. Испания ғалимдары иҫәпләүенсә, пациенттарҙы дауалауҙа заманса технологиялар һәм препараттарҙан тыш, шоколад ҡулланырға ла мөмкин. Лондон колледжы ғалимдары ҡара шоколадтың ҡан тамырҙарын нығытыуын асыҡлаған, ул шулай уҡ организмдың дөйөм хәлен дә яҡшырта. Бауыр циррозы ваҡытында ҡан әйләнеше боҙола, ҡан тамырҙары шартлауы ла бар. Ҡара шоколад ошо симптомдарҙы иҫкәртә лә инде.

■ Йөҙөмдөң шәмәхә һәм ҡыҙыл сорттарында ресвератрол күләме ҙур, шуға ла ул организмдағы майҙарҙы яндырыу сифатына эйә. Ресвератрол ҡан тамырҙары һығылмалылығын арттыра, "насар" холестерин кимәлен түбәнәйтә, тромбтарҙы булдырмай. Банан йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын иҫкәртеүсе сара булып тора. Уның составындағы калий, С, В6 витаминдары йөрәктең эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай. Әфлисун биттәге һырҙарҙы кәметә. Был емештә С витамины күп, шуға ла унан битлек яһау тиренең торошон күпкә яҡшырта.

■ Каролина институты профессоры Май-Лис-Хеллениус билдәләүенсә, ултырғанда, ятҡанда ДНК-ның оҙонлоғо ҡыҫҡара, был иһә уларҙың эшкә һәләтлелегенә, тимәк, кешенең сәләмәтлегенә лә насар тәьҫир итә. Бигерәк организмдың ҡартайыу процесы тиҙәйә. Шуға ла ҡартайғығыҙ килмәһә, ултырғансы, баҫып тороу күпкә яҡшыраҡ, ти профессор, шул саҡта хромосомаларҙы физик һәм башҡа төрлө зыяндан һаҡлаусы теломерҙар оҙонораҡ була. Был генетик кодты һәм сәләмәтлекте нығыта.

■ Төньяҡ Каролиналағы Йоҡо институты табибы Роберт Оксман һәр ярты йыл һайын яҫтыҡты алыштырырға кәңәш итә. Иҫке яҫтыҡта майҙар, туҙан һәм туҙан талпандары йыйыла. Шуға ла яҫтыҡ аллергия сығанағы булып тора ала. Яҫтыҡтың тышын йыш йыуып тороу ҙа был проблеманан ҡотҡармай икән. Ғәҙәттә, кешеләр юрғандары һәм яҫтыҡтары туҙып, йоҡара башлағас ҡына уларҙы алыштырыу тураһында уйлана. Бөйөк Британияның йоҡо Советы мәғлүмәттәренә ярашлы, уларҙың 2-5 йыл һайын яңыларын һатып алыу яҡшыраҡ.

■ Америка табиптары иҫкәртә: күп ҡулланһаң, хатта иң файҙалы ризыҡтар ҙа организмға зыян килтерә. Мәҫәлән, кишер һуты башҡа йәшелсә һуттарынан тәме буйынса айырылып тора, шуға ла Небраска университеты ғалимдары уны ашҡаҙан аҫты биҙе, эсәк сирҙәре мәлендә эсмәҫкә кәңәш итә. Баҡтиһәң, кишерҙә шәкәрҙең төрлө төрҙәре бар икән, айырыуса шәкәр диабеты сирлеләренә кишер ашау тыйыла. Кишер һутын йыш эскән саҡта ашҡаҙан аҫты биҙенә өҫтәмә көсөргәнеш була. Ҡайһы саҡта, был һут яҡшыраҡ үҙләштерелһен өсөн уға ҡаймаҡ өҫтәйҙәр, әммә бында ла сама белергә кәрәк. Быларҙан тыш, кишерҙәге бета-каротин йөҙҙөң төҫөн үҙгәртеүе ихтимал. Шуға ла был һутты аҙнаһына бер тапҡыр эсеү ҙә етә.

■ Һуңғы осорҙа сәләмәт йәшәү рәүешен өҫтөн ҡуйыусылар һаны артҡан. Әммә психологтар сәләмәт туҡланыу менән бәйле булған орторексия сиренең артыуын да билдәләй. Баҡтиһәң, ҡамыр аштары, май, сүпрәле аҙыҡтар, кофеиндан тулыһынса баш тартыу кешене бәхетһеҙ яһай икән. Психологтар әйтеүенсә, туйғансы ашамау һәр ваҡыт депрессияға алып килә, хроник сирҙәр киҫкенләшә.

*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*



# "ПАРАЛЛЕЛЬ ДОНЪЯ... уйҙырма түгел"

**Яҡташым һәм рухи остазым Марат ағай Ишмөхәмәтовтың "Киске Өфө" гәзитендә (№ 27, 28) баҫылып сыҡҡан "Параллель донъя уйҙырма түгел" тигән мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, үҙемдең дә баштан үткәндәрҙе яҙырға булдым, сөнки күптәр беҙҙең донъя менән бергә тағы ла әллә күпме башҡа донъяларҙың да булыуын инҡар итә, уға ышанып етмәй.**

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, һүҙ сыҡҡанда, әлеге осрашыу тураһында күршелә йәшәгән бер апайға һөйләй ҡуйҙым. Аптыраманы. Улының кәләше шул ауылдан. "Улымдың ҡәйнеше район үҙәгенән ауылға ҡайтырға кисләһә, гел генә еҙнәһенә, шул ерҙе үткәнсе генә оҙатып ҡуй әле, тип ялына, юлыма бер аҡ шәүлә килә лә сыға, ҡурҡам, ти торғайны. Ысынлап та бар унда бер шәүлә, кешеләргә осрағанын ишеткәнем бар", - тине күршем.

Бер ваҡыт баяғы әхирәтемә барһам, әсәһе ҡунаҡҡа килгән. Әхирәтем әйтә: "Теге ваҡыт нимә күргәнеңде әсәйемә лә һөйлә әле", - ти. Һөйләгәйнем, ул инәй ҙә аптыраманы. Тик: "Күптән күргән кеше булмағас, мин ул аҡ шәүлә күҙҙән юғалғандыр, тип уйлағайным, бар икән әле һаман да", - тип әйтеп ҡуйҙы. Бына шулай булды минең бер параллель донъяның вәкиле менән осрашыуым.

...2008 йылда тағы ла бер хәлгә шаһит булдым. Унын да һөйләйем әле. Бер шулай, бер-нисә ҡатын-ҡыҙ йыйылышып, Өфөгә Дим биҫтәһенә барып, кейем-һалым алып ҡайтырға булдыҡ. Йәйге ваҡыт. Төнгө өҫтә юлға сыҡтыҡ. Беҙ әхирәтем менән артҡа ултырҙыҡ, өсөнсөбөҙ юлда көтөп тора. Уны алға, водитель эргәһенә ултыртып алдыҡ. Уны ултыртырға туҡтаған саҡта машинаның багажнигына бисуралар ултырып алды бит. Машина ауырайып китте хатта. Килеп тороп һамаҡлап һөйләшәләр, бытылдығы сығалар. Мин шунда ауырып киттем. Баҫлыға башланым. Манма тиргә баттым, тын алыуҙары ауырлашты. Доға уҡыйым тип уйлайым, бер генә доға ла иҫемә төшмәй. Күҙҙәремде көскә асып, ҡыҙҙарға ҡарайым, бер нәмә белмәй йоҡлап баралар. Бөттө, тип уйлайым, былай булғас. Бушҡа ғына китеп барам, бындай хәлдә йөрөй алмаҫмын, барып еткәс, машинала ғына ятып тормон, тип уйлайым. Бармаҡ ҡыбырлатырлыҡ та хәл ҡалманы. Еҫ тейгән саҡтағы кеше кеүекмен: уйым менән барыһын да аңлайым, тик бер нәмә лә эшләй алмайым. Ә теге бисуралар сутылдығы сыға. Бер-береһе менән һамаҡлай-һамаҡлай донъя хәлдәрен һөйләшеп баралар-баралар ҙа: "Өфөгә китеп барамҡмы, әй!" - тип, бармаҡтары менән минең арҡаға төртәләр. Бармаҡтары оҙон, бөйөрөмдө тишеп сығыр төҫлө. Ауыртыуға түҙә алмай, ыңғырашып ҡуям. Багажниктың тимер ҡоршауы, ултырғыстың тимере аша нисек бармаҡтары үтәлер. Был хәл шулай әллә-нисә тапҡыр ҡабатланды. Бөйөрҙәремә, ағзаларыма зыян ғына итмәһәләр ярар ине, тип уйлайым, ләкин үҙемде яҡлап, һаҡлап бер нәмә лә эшләй алмайым. Уларҙы күреп тә булмай, артым менән ултырам бит инде багажникка. Шулай килә торғас, водитель "Урман" кафеһы эргәһенә килеп туҡтаны. Төшөп, тәмәке тартырға булды, ахыры. Сыҡҡас, машинаның тәгәрмәстәрен тибеп ҡараны. Һыҙылып ҡына таң атып килә. Машина туҡтағас, тегеләр ҙә һөйләшеүҙән шып туҡтаны. Таң атыуҙан ҡурҡтылар булһа кәрәк, төшөп ҡалдылар. Уларҙың машинанан төшөүе булды, миңә ҡапыл хәл инде, ярым ятып барған еремдән тороп ултырҙым. Бер нәмә лә булмағандай, кире үҙ хәлемә ҡайтып, кеше булдым да киттем. Юлдаштарым да күҙҙәрен асып, ҡайҙа, нимәгә туҡтағаныбыҙҙы һораштылар ҙа, кире йоҡоға талдылар. Әгәр, һиҙһәләр, ҡурҡырҙар ине.

Параллель донъя йәндәре менән осрашыуҙар тағы ла булды. Унын икенсе юлы һөйләрмен.

**Фәриҙә АЙЫТБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы. Башы 36-сы һанда).**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*



# САҘАҠА КЕМГӘ, доға уҡығанғамы, әллә мохтаждарғамы?

**Тормош булғас, барыһы ла була: тыуымы ла, үлеме лә, тигәндәй... Шулай булһа ла, яҡын кешебеҙҙең яҡты донъянан китеүен һәр беребеҙ ауыр кисерәбеҙ, уны юҡһыныуыбыҙҙы белдереп, рухын ризалатырға теләп, Аллаһы Тәғәләнән мәрхүмдең һәм үҙебеҙҙең гонаһтарҙы ярлыҡауын һорап, өсөн дә, етеһен дә, ҡырҡын да, йыллығын да, артабан йыл һайын үлгән көнөндә күп итеп туғандарҙы, дуҫ-иштәрҙе йыйып, муллаларҙан аяттар уҡытабыҙ.**

Ҡайһы берҙә ваҡыты йә башҡа мөмкинлеге булмағандар, ҙур табын ҡороп тормай, "әбейҙәргә генә уҡытам" тип, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғына саҡыра һәм унда берәй доғаларҙы белгән диндар әбей мәрхүмгә аят бағышлай. Шундай табындарҙың береһендә аят уҡыған апай хужабикә биргән саҙаҡанан баш тартты. "Алла һүҙен аҡсаға һатып ултырырға килмәгәнмен", - тине ул. Кеҫәләренән тимер аҡсаларын сылтыратып сығара башлаған ҡунаҡтар: "Ә беҙгә нимә эшләргә?" - тигән кеүек, аптырашып ҡалдылар. "Саҙаҡа мохтаж кешегә бирелергә тейеш, ә беҙҙең арала беребеҙ ҙә ундай түгел, шуға аҡсаларығыҙҙы кире һалып алығыҙ, аҙаҡ күршегеҙҙәге берәй ярлы ғаиләгә бирерһегеҙ", - тине абыстай.

Беҙҙең бала һәм йәш саҡтар атеизмдың көслө мәленә тура килде, шуға аяттарҙы ла һирәк уҡыталар, уларға мулла табыуы ла ҡыйын ине. Ул ваҡытта өй хужаларынан тыш, башҡа кешеләрҙең саҙаҡа таратыу ғәҙәте лә булманы. Һуңыраҡ, әллә дин рөхсәт ителгәнгәме, әллә халыҡ хәллерәк булып киттеме, аят табындарына саҡырылған һәр кем, мотлаҡ ғәмәлгә һанап, таҫтамал-яулыҡтарын йәиһә ваҡ аҡсаһын тотоп бара башланы. Хәҙер хатта дини сараларҙа хәйер таратмау һаранлыҡ, ҡомһоҙлоҡ билдәһе итеп ҡабул ителә. Ул ғына түгел, кемдең хәйер биргән-бирмәгәнен тикшереп ултыралар, һуңынан "фәлән таратманы ла" йә "шул сама ғына биреп йөрөгән була" тип ғәйепләп һөйләп йөрөүселәр ҙә табыла. Унан килеп, илле-алтмышлап кеше ҡатнашҡан урында был эш байтаҡ ваҡытты ла ала. Ваҡыты ваҡыт та ул, ә бына шул рәүешле күмәкләп этешеп-төртөшөп, ҡапма-ҡаршы тап килгәндә, "Мин һиңә бирҙемме шул" йә "Һин миңә бирмәнең" тип, бер-берең менән аҡса алмашып йөрөү дини күҙлектән дөрөҫмө һуң? Ниңә абруйлы дин әһелдәре был хаҡта бер нәмә лә әйтмәй? Ҡайһы саҡ кеҫәңә һалып алып барғандан күберәк йыйып алып ҡайтаһың бит, шунан ул саҙаҡа буламы инде? Ә бит был аҡсаға ысынлап мохтаж кешеләр бар. Уҡытыусыларҙан һорағыҙ, улар ата-әсәләре эсеү арҡаһында кейемдәре, хатта ручка-дәфтәре булмаған, мәктәпкә ни бары бушлай ашау өсөн генә йөрөгән балалар барлығы тураһында һөйләй. Йәки балаларын яңғыҙ көтөп, ике-өс урында эшләргә мәжбүр булған әсәләр бар. Бәлки, аяттарҙа хәйерлектәрҙе берәй батмусҡа йыйып, дини сараны ойоштороусы ғаилә был аҡсаны уға ысын мәғәнәһендә мохтаж кешегә тапшырһа, шундай балаға кәрәкле әйберен алып бирһә, дөрөҫөрәк һәм сауаплыраҡ булмаҫ инеме икән?

Уң ҡулың биргән саҙаҡаны һул ҡулың белмәҫкә тейеш, тиелә бер хәҙистә. Йәғни, хәйер биреү кешегә күрһәтеү, маҡтаныу өсөн түгел, ә изгелек эшләү хаҡына башҡарыла. Минеңсә, кемгәлер сикһеҙ ҡыуаныс килтереп уҡылған аят ҡына Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡабул ителәлер. Элек атай-әсәйҙәр аятҡа барһа, ҡайтҡас, кеҫәләрендәге саҙаҡа аҡсаһын беҙгә, бала-сағаға, бирә торғайнылар. Ә беҙ ҡыуанып мәктәп буфетынан берәй тәмлекәс алып ашай инек. Хәҙерге балаларҙың тәм-томға, кеҫәлек аҡсаға иҫтәре лә китмәй. Шулай булғас, был рәүешле саҙаҡа бирешеү изгелеккә һаналамы ла, кемебеҙгә шатлыҡ килтерә?

Ошо мәсьәлә бер мине генә борсомайҙыр һәм күптәр ҡасан ул ғәмәл дин әһелдәре тарафынан тәртипкә һалыныр тип көтәлер, тип уйлайым.

**Рәхимә МУСИНА.**
**Әбйәлил районы.**

*ҠАНДАН - АҢҒА, АҢДАН - ЗАҢҒА*

**Бынан ун йыл самаһы элек нәҫел шәжәрәмде өйрәнергә һәм төҙөргә насип булды. Тығыҙынсы быуынға етеп, Ҡунаҡҡужа олатайҙың туғыҙ улын бер епкә теҙгәс, ауылдаштарыбыҙҙың күп өлөшөнөң ошо быуында бер-береһенә ҡан-ҡәрҙәшлеге, туған булыуы асыҡланды. Һәр береһенән киткән тармаҡты өйрәнеү шундай ҡыҙыҡлы һығымтаға килтерҙе. Боронғоларҙың "Алма ағасынан йыраҡ төшмәй" тигән әйтеме бик хаҡ икән. Бала, ысынлап та, йә әсәһенә, йә атаһына оҡшап тыуа. Был йөҙ оҡшашлығына ғына ҡағылмай, ҡылыҡ-фиғел, холоҡ ҡына түгел, ә яҙмыштар уртаҡлығы ла булыуын асыҡланым.**

# ХАҠ ТАМЫРҘАРЫҢ...

## үҙ асылыңа ҡайтара барыбер



Мәҫәлән, Ҡунаҡҡужа олатайҙың оло улы Буранбайҙың улы Ғәбит 1824 йылда Себергә һөрөлгән. Бына ошо Ғәбитовтың улдарынан бик ҙур нәҫел таралып, бөгөн уларҙың береһе лә юҡ, сөнки улар ҙа олаталары яҙмышына дусар булып, кеме Чита өлкәһендә, икенсеһе Ташкент тарафтарында юғалды. Ҡунаҡҡужаның Хәмит исемле улы диндар булған. Ырыу шәжәрәһен өйрәнеү иһә Хәмиттең балаларының дини юлда йөрөүен күрһәтте. Миҫалға уның кесе улы Әбүбәкерҙе алайыҡ. Ул заманында ауыл мәсетендә мәзин вазифаһын башҡарған. Унан таралған нәҫел дә хаҡ мосолман йолаларын үтәп, ғүмерҙәрен ислам диненә бағышланы.

Ҡунаҡҡужаның Сәғит исемле улының Әхмәте заурәд-хорунжий булған. Билдәле булыуынса, был чин хәрби хеҙмәттең оберофицер дәрәжәһенә тура килгән. Ошо Әхмәттең Мәхмүт ҡустыһының беҙҙең көндәрҙә йәшәгән ейәне, бынан ике йыл элек арабыҙҙан киткән Рәсүл Мәхмүтов, полковник дәрәжәһенә етеп, Башҡортостандың янғын һағы идаралығын етәкләне.

Һәм тағы ла Ҡунаҡҡужа олатайҙың туғыҙынсы, иң кесе улы Мөхәммәтҡолой урядник вазифаһын биләгән. Урядник чины казак ғәскәрҙәрендә унтер-офицер дәрәжәһен белдерһә, революцияға тиклем Рәсәйҙә урындағы полиция офицеры дәрәжәһен аңлата. Бер һүҙ менән әйткәндә, чиновник, командир. Быйна шул Мөхәммәтҡолойҙың вариҫы 72 йәшлек Ҡолоев совет власы юҡҡа сығып, урындағы коллектив хужалыҡ таралғансы, ауылыбыҙҙағы бригаданы етәкләгәйне.

Былар менән нимә әйтергә теләгәнемде аңлағанһығыҙҙыр. Кешенең булмышын, тәғәйенләнешен бына шулай параллель үткәреп, бер ни тиклем билдәләргә була. Генетика тигән бик ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс һәм ҡатмарлы фән дә был тәңгәлдә бик күп асыштар эшләгән. Башҡортостанда, Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә билдәле ғалимә, биология фәндәре докторы, профессор Эльза Хөснөтдинованың "Киске Өфө" гәзитендә баҫылған фекерҙәре менән тулыһынса килешәм. Интервьюла һүҙ, әлбиттә, күберәк медицина генетикаһы тураһында бара. Әммә шунан да кәрәкле һығымталарҙы яһарға була. Ғалимә гендарҙың әүҙемләшеүе өсөн мөхит факторҙары йоғонтоһо ҙур, тип аңлата. Әйтер һүҙем ана шул тирә-яҡ мөхит факторҙары йоғонтоһо хаҡында инде. Бала ниндәй мөхиттә үҫә, тәрбиәләнә, артабанғы яҙмышы, күнитмеше лә башлыса шуға бәйлелер, тип уйлайым. Бушҡа ғына атай-олатайҙарыбыҙ, дүрт атай алмашынмай ҡан алмашынмай, тип әйтмәгән, йәғни дүртенсе атай - етенсе быуынға барып сыға. Улар шулай итеп нәҫел таҙалығын күҙәтеп кенә ҡалмаған, ә етенсе быуындан һуң ҡанға икенсе төр һәләт тә ҡушылыуын аңлаған, сөнки ошо быуындар эсендә яңы һәләттәр ҡушылып, нәҫел югарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелә бара.

Башҡорттар борондан быға ныҡ иғтибар биреүен ошо миҫал да бик асыҡ күрһәтә. Тик беҙҙең халыҡта ғына ете быуын ҡәрҙәшлектең үҙ атамаһы бар: атай-әсәй, ул-ҡыҙ, ейән-ейәнсәр, бүлә-бүләсәр, тыуа-тыуасар, тыу ят, ете ят. Ошо дүрт атай алмашынғас, тимәк, ете ятҡа еткәс кенә ҡәрҙәшлек бөтә. Йырҙа ла ла шундай һүҙҙәр бар: ете яттар туған түгел...

Бөгөн дүрт туғандар, хатта өс туғандар өйләнешкән осраҡтар бар. Уларҙан тыуған балалар, бөлки, иҫән-һауҙыр ҙа, әммә балаларынан, ейән-ейәнсәрҙәренән тыуған сабыйҙарҙың алты һаны теүәл булыуы шикле.

Кешелеккә туған ҡандарҙы ҡушмау бурысы Юғары көс тарафынан да бирелгән. Беҙ иһә уны йыш ҡына һанға һуҡмайбыҙ, үҙебеҙ беләбеҙ, йәнәһе. Ә бит Тәбиғәттә бөтә нәмәнең үҙ ҡануны, законы бар, кешелек яралғандан алып, бөтә нәмә ҡалыпҡа һалынған. Беҙ уларҙы күрергә, белергә, ишетергә генә теләмәйбеҙ. Әйтәйек, ислам динендәге милләт халыҡтары ҡанында алкоголгә ҡаршы бөтөнләй иммунитет юҡ. Был ғалимдар тарафынан күптән раҫланған факт.

Йыш ҡына бейек-бейек трибуналарҙан, тарихыбыҙҙы, телебеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлайыҡ, тип һөйләргә яратабыҙ. Ә милләтебеҙҙе генетик яҡтан һаҡлау буйынса өряңы ҡараш тәҡдим иткән фекерҙәр юҡ әле. Теләйбеҙме, юҡмы, гендар кимәлендә тәбиғи процестар бара, ә күпселек осраҡта кире бороп булмаҫлыҡ хәлгә еткәндәр лә бар.

Һүҙемде башлаған нәҫелебеҙ шәжәрәһенә кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Ҡунаҡҡужаның Хәмит исемле улы диндар булған, тип яҙғайным инде. Мин үҙем нәҡ шул тармаҡтан. Күнелемдән һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнең барлығына, берлегенә ышанһам да, тәкәбберлектәнме, ваҡыт юҡлыҡтанмы йәки башҡа төрлө сәбәптәрҙәнме, дин фәлсәфәләрҙе өйрәнергә, уның ҡануындарын үтәргә насип булмағайны. Аллаһы Тәғәләгә илткән юл һәр кемдең үҙенеке тигәндәре бик тә дөрөҫ. Ете йыл элек ҡаты ауырыуҙан һуң Юғары көс дин юлына килтерҙе. Уның ни өсөн икәнлеген һуңынан ғына аңланым.

Ғәрәпсә уҡырға өйрәнгәс, Хәмит олатайҙың бүләһе Абдрахман олатайҙың васыят итеп ҡалдырған Ҡөрьән Кәриме миңә насип булды. Олатай унда Мәрйәм сүрәһенең бер аятын ҡәләм менән уратып һыҙған. Уның мәғәнәһе: "Уларға Әр-Рахмандың аяттары уҡылһа, улар илап һәм сәждә ҡылып, йөҙтүбән йығылалар. Һәм улар артынан тоҡомдар килде, улар намаҙҙы юғалттылар һәм шәүһәтнәфселәренә эйәрҙеләр, һәм улар һәләкәткә осраясаҡтар". Намаҙға баҫып, сәждә ҡылмаһаң, һәләкәт һәм үлем киләсәк. Ошоно аңлағас ҡына ауырыуҙан йүнәлдем. Ә бит Абдрахман олатай бүләһенә, йәғни миңә, заманында уҡ Аллаһы Тәғәлә һүҙҙәре аша намаҙға баҫырға васыят итеп ҡалдырған.

Быға тиклем яҡын аралағы туғандарымда диндар кеше булмаған, ни өсөн миңә дингә килергә насип итте икән, тип йөрөһәм, диндарлыҡ гендар менән бирелеп, тик һуңынан ғына аң аша аңлау килгән икән. Беҙгә йәшәү тәртибе Тәбиғәттән гендар аша күсә килә, тик уны әлегә әллә аңлы, әллә аңһыҙ рәүештә боҙабыҙ, балаларыбыҙ телен белмәй, ололар һүҙен һанға һуҡмай, тибеҙ.

Һүҙемде йомғаҡлап, йәмәғәтселеккә шундай һорау биргем килә: атай-олатайҙарыбыҙ менәр йылдар йыйған, тәртипкә һалған, йәшәү рәүеше итеп һайлаған ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе кире тергеҙмәһәк, халҡыбыҙҙы милләт булараҡ һаҡлап ҡала алырбыҙмы икән?

**Сәйфулла ӘМИРОВ,**
**"Көнгәк" гәзите**
**баш мөхәррире.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Гәзитебеҙҙең был һанында сығыштары баҫылған авторҙарыбыҙ - Гөлнур Ишбулатова, Хәйҙәр Тапаҡов һәм Сәйфулла Әмиров республика Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына тәҡдим ителде. Ошо бүләккә лайыҡлы был журналистарға еңеүҙәр һәм уңыштар теләйбеҙ!**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Уйланырға мәжбүр итергә тейешле һорауҙар

Яуаплылыҡ: әгәр тупты ҡапҡаға табан алып бара алмайһығыҙ икән, команда башлығы ла була алмайһығыҙ. Гилберт Арланд шундай кәңәш бирә: "Атыусы сәпкә яҙа ата икән, ул сәбәпте үҙенән эҙләй. Сәптең уртаһына тейҙерә алмағанда, бер ваҡытта ла сәп ғәйепле түгел. Сәпкә тура атыр өсөн үҙ өҫтөгөҙҙә эшләгеҙ".

Яуаплылыҡ тигән сәпкә яҡшы тоҫҡайһығыҙмы? Тирә-яҡтағылар һеҙҙе башлаған эшегеҙҙе аҙағына еткереүсе тип иҫәпләйме? Ауыр ваҡыттарҙа дуҫтарығыҙ һеҙгә тупты тапшырамы? Ысынлап та һеҙ камиллыҡҡа ынтылыуығыҙ менән билдәләме? Әгәр юғары кимәлдәге эшмәкәрлек хас түгел икән, моғайын, һеҙ үҙегеҙҙә көслө яуаплылыҡ тойғоһон үҫтереү буйынса махсус көс түгеүгә мохтажһығыҙҙыр.

**Өйгә эш**

**Яуаплылыҡ тойғоһон күтәреү өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

● Һәр эшегеҙҙе аҙағына еткерегеҙ. Ҡайһы берҙә, ауыр хәл-торошҡа ҡарамаҫтан, нимәнелер эшләй алмауығыҙ ныҡышмаллыҡ юҡлығы менән аңлатылыуы мөмкин. Икенсе ваҡыт һеҙгә һуңғы көндә лә эште эшләмәү ихтималлығы тураһында белдерһәләр, файҙалы килешеүҙе әҙһәләр йәки ниндәйҙер проекты үле нөктәнән ҡуҙғатыу мөмкинлеге юҡлығын белдерһәләр, туҡтағыҙ ҙа, был мәсьәләне нисек хәл итеп була икәнлеген уйлағыҙ. Стандарт булмаған алымдар ҡулланырға һәләтлеһегеҙме? Кисен, хатта төнөн эшләргә әҙерһегеҙме? Ярҙам һорап коллегағыҙға шылтырата алаһығыҙмы? Үҙ аҡсағыҙға ойошмағыҙҙан бер кешене илләргә йәки ирекмән ярҙамсы табырға мөмкинме? Ижади ҡеүәтегеҙ тормошоғоҙға яңы яуаплылыҡ тойғоһо индерә аласаҡ.

● Тормошоғоҙҙа барыһы ла яҡшы түгел икәнлеген таныһығыҙ. Әгәр камиллыҡҡа өлгәшеүҙә ауырлыҡтар бар икән, моғайын да, кимәлегеҙҙе шул тиклем түбән ҡуйғанһығыҙҙыр. Шәхси тормошоғоҙҙа "бер урында тапанған" өлкәләрҙе эҙләгеҙ. Һуңынан юғары стандарттар формалаштырыу маҡсатында кәрәкле үҙгәрештәр индерегеҙ. Был һеҙгә камиллыҡ өсөн көрәштә планкағыҙҙы күтәрергә ярҙам итер.

● Камиллашыу өсөн иң яҡшы "ҡоралды" табығыҙ. Әгәр стандарттарығыҙҙы юғары тип иҫәпләһәгеҙ, психологик көйләнешегеҙ хаҡ һәм һеҙ системалы һәм ныҡышмал рәүештә эшләйһегеҙ, әммә барыбер ҙә теләгегеҙгә өлгәшә алмайһығыҙ икән, түбәндәгесә эшләгеҙ: оҫталығығыҙҙы үҫтереү менән шөғөлләнегеҙ, бының өсөн кәрәкле күнекмәләргә йөрөгөҙ, китаптар уҡығыҙ, аудиояҙмалар тыңлағыҙ. Яҡшы остаз табығыҙ. Үҙегеҙ башҡарған эштә яҡшыраҡ булыу өсөн талап ителгәндең барыһын да эшләгеҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 15 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.05 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Верь мне". Сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Хорошие руки". Криминальный сериал. 9-я и 10-я серии (16+).
23.45 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 Ночные новости.
00.35 "Форс-мажоры". Сериал (16+).
01.30, 03.05 "Прощай, любовь". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.30 "В наше время" (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Танки. Уральский характер". Док. фильм, часть 1 (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Узнай меня, если сможешь". Остросюжетный сериал. 23-25-я серии (12+).
23.40 "Вечная жизнь. Медицина будущего". Док. фильм (12+).
00.40 "Женщины на грани". Детективный сериал (16+).
02.40 "ТАСС уполномочен заявить..." Сериал.
04.00 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
